МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ

Министерство просвещения Республики Башкортостан

Муниципальный район Архангельский район республики Башкортостан

МОБУ СОШ с. Бакалдинское

| РАССМОТРЕНО: | СОГЛАСОВАНО: | УТВЕРЖДЕНО: |
| --- | --- | --- |
| на заседании ШМО | зам.директора по УВР | директор школы |
| руководитель ШМО | _____ Сагитдинова А. М. | _____ Клокова М.А. |
| _____ Еронова А.В. | от _____2025 г. | Приказ 76 |
| Протокол № 1 | | №_____от 30.08 2025 г. |
| от 29.08 2025 г. | | |

Рабочая программа

по государственному (башкирскому) языку

на 2025 - 2026 учебный год для 1- 4 классов.

с. Бакалдинское – 2025 г.

**ЙӨКМӘТКЕҺЕ**

**Аңлатма яҙыу**.............................................................3-8

“Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле” уҡыу предметына дөйөм ҡылыҡһырлама.........................................................4-5

“Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле” уҡыу предметының маҡсаты һәм бурыстары.............................................5-6

“Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле” уҡыу предметының урыны.........................................................................6-7

“Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле” уҡыу предметынан өлгө программаның төп йөкмәткеле йүнәлештәре.................................................................................7-8

**Уҡыу предметының йөкмәткеһе.**......................................8-13

Беренсе уҡыу йылы...........................................................8-10

Икенсе уҡыу йылы...........................................................10-11

Өсөнсө уҡыу йылы...........................................................11-12

Дүртенсе уҡыу йылы........................................................12-13

**“Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле” уҡыу предметының башланғыс белем биреү кимәлендә планлаштырылған һөҙөмтәләре**..........................................................................13-22

Шәхси һөҙөмтәләр ...........................................................13-15

Метапредмет һөҙөмтәләре.................................................15-18

Предмет һөҙөмтәләре........................................................18-22

**Тематик планлаштырыу**..................................................22-38

1-се класс............................................................................22-25

2 –се класс..........................................................................25-27

3 –сө класс..........................................................................27-30

4 –се класс..........................................................................30-33.

**Ҡушымта** ...........................................................................33-39

# АҢЛАТМА ЯҘЫУ

“Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле” (дөйөм белем биреү ойошмаларының 1-4 класы өсөн) уҡыу предметынан программаһына түбәндәге документтар хоҡуҡи-норматив нигеҙ булып торҙо:

1) Рәсәй Федерацияһының Конституцияһы;
2) 2012 йылдың 29 декабренән “Рәсәй Федерацияһында белем биреү” (үҙгәртеүҙәр һәм тулыландырыуҙар менән) 273-сө федераль законы;
3) 1991 йылдың 25 октябренән 1807-1-се “Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында” Рәсәй Федерацияһы законы (үҙгәртеүҙәр һәм тулыландырыуҙар менән);
4) Башланғыс дөйөм белем биреүҙең федераль дәүләт белем биреү стандарты (2021 йылдың 31 майында Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының 286-сы приказы менән раҫланған);
5) Башланғыс дөйөм белем биреүҙең яҡынса төп белем биреү программаһы (дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡыу-методик берекмә ҡарары, 2022 йылдың 18 мартындағы 1/22-се протокол менән раҫланған);
6) Тәрбиә биреүҙең яҡынса программаһы (дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡыу-методик берекмә ҡарары, 2022 йылдың 23 июнендәге 3/22-се протокол);
7) Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының 2019 йылдың 1 октябрендәге коллегия ултырышында раҫланған Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу концепцияһы;
8) Республика Башлығының 2020 йылдың 30 декабрендәге 613-сө Указы менән раҫланған Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу концепцияһы;
9) Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);

10) 2013 йылдың 1 июлендәге 696-з һанлы «Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында» Башҡортостан Республикаһы Законы (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән).

“Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле” уҡыу предметы Башҡортостан Республикаһы территорияһында урынлашҡан дәүләт һәм муниципаль белем биреү ойошмаларында Башҡортостан Республикаһы ҡануниәте һәм башланғыс дөйөм белем биреү Федераль дәүләт белем биреү стандартына ярашлы “Туған тел һәм туған телдә әҙәби уҡыу” предмет өлкәһе сиктәрендә бәлиғ булмаған уҡыусыларҙың ата-әсәләренең (законлы вәкилдәренең) ғаризаһына ярашлы өйрәнелә.

Программа нигеҙенә Федераль дәүләт белем биреү стандартының методологияһы булған системалы-эшмәкәрлекле ҡараш һалынған. Программа Өлгө тәрбиә программаһында ҡабул ителгән өҫтөнлөклө маҡсаттарға һәм уҡытыусыларға “Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле” уҡыу предметынан эш программаһын төҙөүҙә методик ярҙам күрһәтеүгә йүнәлтелгән.

Программа уҡыу йылдары буйынса уҡытыу предметының йөкмәткеһен, «Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле» дәресе саралары менән уҡыусыларға белем, тәрбиә биреү һәм үҫтереүҙең төп методик стратегияларын билдәләй.

Программа уҡытыусыға түбәндәге мөмкинлектәрҙе бирә:

1. Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) телен уҡытыу процесында башланғыс дөйөм белем биреүҙең Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы шәхсән, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләренә ирешеүҙә заманса ҡараштарды тормошҡа ашырырға;

2. Төп хоҡуҡи документтарға ярашлы “Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле” уҡыу предметының

йөкмәткеһен уҡыу йылдарына ярашлы планлаштырырға һәм алдан күтәрелгән һөҙөмтәләрҙе билдәләргә;

3. Календарь-тематик план төҙөгәндә конкрет кластың үҙенсәлектәрен иҫәпкә алырға, уҡыу материалын үҙләштереү өсөн тәҡдим ителгән төп эшмәкәрлек төрҙәрен һәм сәғәттәрҙе темаларға яҡынса бүлеү өлгөһөн файҙаланырға.

## “Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле” уҡыу предметына дөйөм ҡылыҡһырлама

Программаның йөкмәткеһе башланғыс дөйөм белем биреү Федераль дәүләт белем биреү стандарттарындағы “Туған тел һәм туған телдә әҙәби уҡыу” предмет өлкәһе талаптарына ярашлы башланғыс дөйөм белем биреү программаһы һөҙөмтәләренә ирешеүгә йүнәлтелә.

“Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле” уҡыу предметын өйрәнеү гуманитар циклдағы башҡа уҡыу предметтары менән предмет-ара бәйләнеште тормошҡа ашырыуҙы күҙ уңында тота.

Башҡортостан Республикаһы Конституцияһына һәм “Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре” законына ярашлы, ике дәүләт телен белеү республикала йәшәүсе халыҡтар араһындағы килешеп йәшәүҙең нигеҙен тәшкил итә. Мәктәптә белем биреү шарттарында дәүләт (башҡорт) теле аралашыу сараһы һәм уҡыусыларға әхлаҡи тәрбиә биреү ысулы булараҡ күҙаллана. Аралашыу сараһы булараҡ дәүләт (башҡорт) телен белеү уҡыусыларҙа көндәлек тормошта аралашырға, уларҙы күп милләтле йәмғиәттә аңлашып һәм хеҙмәттәшлек итеп йәшәргә һәләтле һәм әҙер итә.

“Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле” предметының үҙенсәлеге, уҡыу процесының аралашырға өйрәтеүгә йүнәлтелгән булыуы, башҡа предмет өлкәләре менән бәйләнеше уҡыусыларҙың ике дәүләт телендә лә иркен аралашыусы тел шәхесе булып үҫешенә булышлыҡ итә.

Башланғыс мәктәптә рус һәм башҡорт, шулай уҡ сит телдәрҙе өйрәнеү уҡыусыларға үҙҙәренең билдәле этносҡа, Рәсәйҙең граждандар йәмғиәтенә һәм халыҡ-ара берләшмәгә ҡарағанлығын аңларға булышлыҡ итә.

Дәүләт (башҡорт) телен уҡытыу универсаль уҡыу ғәмәлдәрен формалаштырыуға нигеҙ һала. Уҡыусылар белем биреү эшмәкәрлегенең мәғәнәһен һәм әһәмиәтен аңлай, белем алырға, телде үҙләштереүҙә үҙаллы эшләргә өйрәнә, был артабанғы үҫеш һәм үҙ-үҙеңде камиллаштырыу өсөн нигеҙ булып тора.

«Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле» предметының йөкмәткеһе уҡыусыларҙың дәүләт (башҡорт) телен милли мәҙәниәтте танып белеү һәм унда үҙ-үҙеңде күрһәтеү ҡоралы буларак өйрәнеүгә ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүгә йүнәлтелгән.

**«Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле» дәресен өйрәнеүҙең маҡсаты һәм бурысы**

«Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле» дәресен өйрәнеүҙең маҡсаты - уҡыусыларҙа социаль-көнкүреш, уҡыу-хеҙмәт һәм социаль-мәҙәни өлкәләрҙә башҡорт телендә аралашыу мөмкинлеген тәьмин итеүсе коммуникатив компетенция булдырыу. «Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле» уҡыу предметын өйрәнеүҙең бурыстары:

- тел йөрөтөүселәр менән үҙенең телмәр мөмкинлектәре һәм ихтыяждары кимәлендә аралашыу һәләтен һәм әҙерлеген формалаштырыу: телдән һөйләшеү һәм фекер алышыу, яҙма рәүештә (уҡыу һәм яҙыу), телдән һәм яҙма формала шәхес-ара һәм мәҙәни аралашыу оҫталығын арттырыу;

- балалар фольклоры һәм матур әҙәбиәт, мәҙәни пландағы материалдар менән танышыу аша башҡорт мәҙәниәтенә ихтирамлы мөнәсәбәт тәрбиәләү;

- уҡыусыларҙың лингвистик аң даирәһен киңәйтеү; уҡыусыларға аңлайышлы һәм дәүләт (башҡорт) телендә телдән, яҙма телмәрҙе үҙләштереү өсөн кәрәкле лингвистик күҙаллауҙарҙы элементар кимәлдә үҙләштереү;

- тел системаһы менән танышыу һәм уның нигеҙендә төп лексик, грамматик, стилистик, орфоэпик, орфографик һәм пунктуацион оҫталыҡтарын булдырыу; уҡыусының тел күренештәрен һәм факттарын анализлауға һәм баһалауға һәләтен арттырыу;

- тел факттарын айырыу, анализлау, классификациялау оҫталығын формалаштырыу, уларҙы норматив, хәлдең һәм аралашыу өлкәһенең тап килеүе ҡарашынан баһалау; текст менән эшләү, төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәт эҙләү, уны төрлө типтағы үҙаллы булдырылған фекерҙәрҙә тапшырыу;

- уҡыусыларҙың рухи донъяһын, дөйөм кешелек ҡиммәттәрен формалаштырыу, туған тел аша кешелектең мәҙәни ҡиммәттәренә ылыҡтырыу.

**«Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле» уҡыу предметы буйынса яҡынса эш программаһының төп йөкмәткеле йүнәлештәре**

Дәүләт (башҡорт) теле курсында түбәндәге йөкмәткеле йүнәлештәр айырыла:

- телмәр эшмәкәрлегенең төп төрҙәрендә (тыңлау, һөйләшеү, уҡыу, яҙыу) коммуникатив оҫталыҡты формалаштырыуға булышлыҡ иткән «Телмәрҙе үҫтереү» йөкмәткеле йүнәлеше;

- «Лингвистик белем нигеҙҙәре» йөкмәткеле йүнәлеше башҡорт теленең фонетикаһы, лексикаһы, грамматикаһы өлкәһендә тел күнекмәләрен формалаштырыуға булышлыҡ итә. Ике йөкмәткеле йүнәлеш тә үҙ-ара бәйләнгән, һәм уларҙың береһенең булмауы «Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле» уҡыу предметының берҙәмлеген боҙа.

**«Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле» предметының уҡыу планындағы урыны**

Федераль дәүләт башланғыс дөйөм белем биреү стандартына ярашлы, «Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле» уҡыу предметы «Туған тел һәм туған телдә әҙәби уҡыу» предмет өлкәһенә ҡарай.

Дәүләт телдәрендә уҡытыу, дәүләт телдәрен өйрәнеү Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы алып барыла һәм дәүләт аккредитацияһы үткән төп белем биреү программалары сиктәрендә башҡарыла.

Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) телен өйрәнеү башланғыс кимәлдә 136 сәғәт күләмендә ҡаралған: 1-4-се кластарҙа йылына 34 сәғәт (аҙнаға 1 сәғәт).

Белем биреү программаһын дәүләт санитар-эпидемиологик ҡағиҙәләр һәм нормативтар талаптарын үтәп, дәрестән тыш һәм ғәҙәттән тыш эшмәкәрлек аша мәғариф учреждениеһы ғәмәлгә ашыра. Белем биреү ойошмаһы мәғариф мөнәсәбәттәрендә ҡатнашыусыларға дәрестән тыш эшмәкәрлектең төрлө формаларын һайлау мөмкинлеге бирә. Дәрестән тыш эшмәкәрлек белем биреү мөнәсәбәттәрендә ҡатнашыусыларҙың һайлауына ярашлы ирекле нигеҙҙә ойоштторола.

Мәғариф учреждениеһы белем биреү мөнәсәбәттәрендә ҡатнашыусылар әҙерләгән пландың бер өлөшө иҫәбенә уҡыу предметын өйрәнеү өсөн бүленгән сәғәттәр һанын үҙаллы арттырырға хоҡуҡлы. Федераль дәүләт башланғыс дөйөм белем биреү стандартына ярашлы, мәғариф һөҙөмтәләренә ҡарата бер нисә талап мәғлүмәт технологияларын ҡулланыу кәрәклеге менән туранан-тура бәйләнгән. Дәүләт (башҡорт) теле дәрестәрендә ҡулланыу өсөн цифрлы һәм электрон белем биреү ресурстары «Мәғлүмәт ресурстары» ҡушымтаһында бирелгән.

## «Башҡортостан Республикаһы дәүләт (башҡорт) теле» уҡыу предметының йөкмәткеһе

1-се класс

Грамотаға өйрәтеү

**Башҡортостан - минең тыуған ерем.**

Телмәрҙе үҫтереү. Күп милләтле Башҡортостан Республикаһы. Дәүләт (башҡорт) теле. Башҡортостан Республикаһының дәүләт символикаһы. Дәреслек менән танышыу. Башҡортостан тураһында видеоролик.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Тел тураһында дөйөм төшөнсә. Һөйләү телмәре һәм яҙма телмәр.

**Иҫәнләшергә өйрәнәбеҙ.**

Телмәрҙе үҫтереү. Ҡыҫҡа сәләмләү репликаларын тыңлау. Уҡытыусы артынан сәләмләү һүҙҙәрен ҡабатлау. Һүрәттәр менән эшләү, әкиәт геройҙарын билдәләү.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Һөйләм һәм һүҙ. График схемаларҙы файҙаланып, телмәрҙе һөйләмдәргә, һөйләмдәрҙе һүҙҙәргә, һүҙҙәрҙе ижектәргә тарҡатыу.

**Әйҙәгеҙ, танышайыҡ.**

Телмәрҙе үҫтереү. Сәләмләү һүҙҙәрен ҡабатлау. Ҡыҫҡа диалогтар тыңлап аңларға өйрәнеү. «Һинең исемең нисек?» һорауын өйрәнеү, яуап төҙөү: “Минең исемем....”

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре: **һ, ғ, ҙ.**

**Мин танышам**

Телмәрҙе үҫтереү. 1-10-ға тиклем иҫәп. Ҡыҫҡа репликаларҙы тыңлау. «Һиңә нисә йәш?» һорауын өйрәнеү һәм яуап төҙөү: «Миңә... йәш».

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Алфавит, башҡорт һәм урыҫ телдәрендә әйтелештәре айырылған А**а, Оо, Ыы, Ээ, Вв** (у) хәрефтәрен өйрәнеү.

**Мин һәм минең ғаиләм**

Телмәрҙе үҫтереү. Ғаилә тураһында диалог тыңлау. Ғаилә ағзаларының атамалары менән танышыу.Өндәр менән тиҙәйткестәр өйрәнеү. Сюжетлы картина буйынса һүҙҙәр һәм һөйләмдәр схемаһын төҙөү, һүҙҙәргә өн анализы яһау.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Һүҙҙең башында, уртаһында һәм аҙағында өндәрҙең урынын билдәләү, әйтергә өйрәнеү. **Әә, Өө, Үү, Һһ** хәрефтәрен өйрәнеү.

**Мәктәптәге тормошом.**

Телмәрҙе үҫтереү. Мәктәп, класс тураһында текстар тыңлау. Уҡыу кәрәк-яраҡтарын, төҫтәрҙе, аҙыҡ-түлекте аңлатҡан һүҙҙәрҙе өйрәнеү. «Нимә яратаһың?» һорауын үҙләштереү, яуап биреү: «Мин ятатам...» Ижектәр, һүҙҙәр уҡый белеү оҫталығын тәрбиәләү.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Һүҙҙең башында, уртаһында һәм аҙағында өндәрҙе ишетеү, әйтергә өйрәнеү**. Ғғ, Ҡҡ, Ҙҙ, ҫ, ң** хәрефтәрен өйрәнеү.

**Мин уйнарға яратам**

Телмәрҙе үҫтереү. Уйынсыҡтар тураһындағы тексты тыңлап аңлау. Тема буйынса лексик берәмектәрҙе үҙләштереү. Таныш лексика менән булған репликаларҙы тәржемәләү. Төрлө типтағы ижектәрҙе уҡыу.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Дифтонгыларҙы өйрәнеү: **йү, йо, йө.** Текста төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе тултырыу.

**Тәбиғәтте өйрәнәм**

Телмәрҙе үҫтереү. Емеш-еләк һәм йәшелсә тураһындағы тексты тыңлап аңлау. «Минең яратҡан йәшелсәләрем» темаһы буйынса лексик берәмектәрҙе үҙләштереү. «Йәшенмәк» уйыны. Йыл миҙгелдәре тураһында һөйләмдәр төҙөү. Уҡыу ҡағиҙәләрен аңлау һәләтен камиллаштырыу: төрлө типтағы ижектәрҙе, дифтонгыларҙы уҡыу.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Дифтонгыларҙы өйрәнеү. Алдан өйрәнелгән дифтонгыларҙы ҡабатлау.

Белемде контролләү. Өйрәнелгән материалды ҡабатлау, контроль эш үткәреү, хаталарҙы төҙәтеү.

**2-се класс**

**Таныш булайыҡ**.

Телмәрҙе үҫтереү. Танышыу тураһындағы ҡыҫҡа тексты тыңлау, был тема буйынса репликалар төҙөү. «Танышыу» темаһы буйынса өйрәнелгән һүҙҙәрҙе әүҙемләштереү, лексиканы яңы һүҙҙәр менән байытыу, дәреслек менән танышыу, һүҙҙәр, һөйләмдәр, шиғырҙар һәм ҡыҫҡа текстар уҡыу. Текстарҙы уҡыу (уҡытыусы күрһәтмәһе буйынса һәм һайлап). «Дуҫың менән таныштыр» уйынын өйрәнеү. «Һин кем?» («Һеҙ кем?»), «Һинең исемең нисек?» («Исемең кем?»), «Һеҙҙең исемегеҙ нисек?» («Исемегеҙ кем?»), «Уның исеме нисек?» («Уларҙың исеме кем?»), «Һин ҡайҙа йәшәйһең?» һорауҙарын үҙләштереү, яуап бирергә өйрәнеү. LearningApps, ЯКЛАСС. платформаларында эшләү.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Өндәр һәм хәрефтәр. Алфавитты, башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен ҡабатлау. Күнегеүҙәр эшләгәндә алфавитты ҡулланыу. Тексты һүҙҙәргә бүлеү, һөйләмдә һүҙҙәр һанын билдәләү. Һүҙҙә тартынҡыларҙы һәм һуҙынҡыларҙы асыҡлау. Алмаш. Зат, һорау алмаштары. Алмаштарҙы телмәрҙә ҡулланыу.

**Мин туғандарымды яратам.**

Телмәрҙе үҫтереү. «Ғаилә» темаһы буйынса өйрәнелгән һүҙҙәрҙе әүҙемләштереү, лексиканы яңы һүҙҙәр менән байытыу, өлгөгә таянып ғаилә ағзалары хаҡында хикәйәләр төҙөү, ғаилә тураһында текстар тыңлау, тыңланған текстың йөкмәткеһе тураһында тест тултырыу. Диалогтар уҡыу, бирелгән яуаптарға һорауҙар төҙөү, өйрәнелгән лексиканы файҙаланып, ҡыҫҡа диалогтар ҡороу. Һүҙьяһалыш моделе һәм бирелгән өлгө буйынса диалогта өйрәнелгән һүҙҙәрҙе ҡулланылыу. Сюжетлы картиналар буйынса һөйләмдәр, ҡыҫҡа текстар төҙөү.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Һүҙьяһалыш моделе: төҙөү- се, бейеү -се, теген -се, балыҡ- сы, яҙыу -сы, ҡурай -сы. «Минең, һинең, уның», «Беҙҙең, һеҙҙең, уларҙың» эйәлек алмаштары. («Беҙҙеке, һеҙҙеке, уларҙыҡы»). Синтаксис. Раҫлаусы һәм һорау һөйләмдәр, һөйләм аҙағында тыныш билдәләре. Һүҙ төркөмдәренең һөйләм киҫәктәренән айырмаһы. Һөйләм аҙағында тыныш билдәһен һайлау.

**Мәктәп тормошом һәм мауығыуҙарым.**

Телмәрҙе үҫтереү. «Мәктәп» темаһы буйынса өйрәнелгән һүҙҙәрҙе әүҙемләштереү, лексиканы яңы һүҙҙәр менән байытыу. «Минең мәктәбем ниндәй?», «Яратҡан шөғөлөң ниндәй?» һорауҙарын үҙләштереү һәм яуап бирергә өйрәнеү, өлгө буйынса яратҡан шөғөлдәрең тураһында бәләкәй генә текстар, ҡыҫҡаса диалог-һорауҙар төҙөү. Мәктәп тормошо һәм шөғөлдәре тураһындағы текстар буйынса әңгәмәләшеү оҫталығын үҫтереү. Тексты һайлап һөйләү. Тәҡдим ителгән тема буйынса проект эше, анализлау һәм дөйөмләштереү, үҙ эшең менән таныштырыу.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Морфология. Исем һүҙ төркөмө. Һүҙҙәрҙе һүҙ төркөмдәре буйынса төркөмләү. Телмәрҙә исемдәрҙе ҡулланыу. «Кем?» «Нимә?» һорауҙарына яуап биргән исемдәрҙе айырыу. Исемдәрҙең һан һәм зат менән үҙгәреүе.

**Дуҫтар менән уйнарға барам.**

Телмәрҙе үҫтереү. Балалар уйындары тураһында шиғырҙы тыңлап аңлау. Өйрәнелгән темаға ярашлы, лексик берәмектәрҙе, «Был нимә?» Нимә ул?», «Был кем?» «Миңә нимә кәрәк?», «Нимә эшләргә?», «Нимә эшләй?» («Нимә эшләйбеҙ?»), «Нимә эшләйбеҙ?» («Ни эшләйбеҙ?»), «Ҡайҙа нимә эшләйбеҙ?» һорауҙарын үҙләштереү, яуап бирергә өйрәнеү.Телмәрҙә үҙләштерелгән һүҙҙәрҙе ҡулланыу, терәк һүҙҙәр буйынса тексты һөйләү, берлектәге уйындар тураһында ҡыҫҡаса диалогтар төҙөү. Деформацияланған һөйләмдәрҙе тергеҙеү, һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен ҡабатлау. Һаулыҡ һаҡлау тураһында текстар уҡыу. Балалар халыҡ уйыны (уҡытыусы һайлауы буйынса) менән танышыу.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Синтаксис. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Һөйләмдәге һүҙҙәр тәртибе. Ҡылым. «Нимә эшләргә?», «Нимә эшләйбеҙ?» «Ҡайҙа нимә эшләйбеҙ?” һорауҙарына яуап биргән ҡылымдарҙы танырға өйрәнеү.

**Тирә-яҡ донъяны өйрәнәм**

Телмәрҙе үҫтереү. Тексты тыңлау, фекер алышыу, тыңланған тексттың йөкмәткеһе буйынса һорауҙарға яуап биреү, лексиканы тема буйынса яңы һүҙҙәр менән байытыу. «Ниндәй?», «Ҡайҙа?», «Ҡасан?» һорауҙарына яуап бирергә өйрәнеү. Өйрәнелгән һүҙҙәрҙе һәм фразаларҙы ҡулланыу, текстарҙы уҡыу, һорауҙарға яуаптар төҙөү, һорауҙар, план буйынса һөйләү. Деформацияланған текстарҙы тергеҙеү, һүҙлек диктанттары яҙыу.

Ағастарҙың, үләндәрҙең, бөжәктәрҙең, ҡоштарҙың атамаларын рус теле менән сағыштырып өйрәнеү. Бирелгән хәл һәм тема буйынса диалогик һәм монологик текстар төҙөү күнекмәһен камиллаштырыу.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. “Сифат” һүҙ төркөмө. Сифаттарҙың мәғәнәһен билдәләү һәм уларҙы телмәрҙә ҡуллана белеү. «Ниндәй?» һорауҙарына яуап биргән ҡушма исемдәрҙе айырыу. Ниндәй? һорауы һәм ҡылым, Ҡайҙан? һорауы һәм ҡылым, Ҡайҙа? һорауы һәм ҡылым һүҙбәйләнештәрен өйрәнеү.

Белемде контролләү. Өйрәнелгән материалды ҡабатлау, хаталар өҫтөндә эш, проекттар төҙөү.

## 3 класс

**Танышыуға шатбыҙ!**

Телмәрҙе үҫтереү. Был тема буйынса өйрәнелгән һүҙҙәрҙе әүҙемләштереү, «Һин ҡайҙан?» һорауын бирә белеү һәм уға яуап ҡайтарыу, кәрәкле мәғлүмәтте табыу, телмәрҙә әҙер клише ҡулланыу, интоцияны дөрөҫ аңлау. Танышыу тураһындағы текстар тыңлау. Тыңланған текст буйынса һөйләмдәрҙе тулыландырыу. Дәреслектәге текстарҙы уҡыу, орфоэпик уҡыу нормаларын камиллаштырыу. Деформацияланған текстарҙы тергеҙеү, анкеталар тултырыу. Өйрәнелгән фразаларҙы ҡабатлау, телмәрҙе яңы һүҙҙәр менән байытыу, балалар әҫәрҙәренең персонаждары (исеме, йәше) менән танышыу. Телмәрҙә башҡорт телмәр этикетының типик фразаларын ҡулланыу. Телмәрҙең диалогик һәм монологик формаларын үҫтереү.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Һөйләмдәрҙең төрҙәрен ҡабатлау. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре.

**Белем алам**

Телмәрҙе үҫтереү. Телмәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе әүҙемләштереү, мәктәп, дәрестәр тураһындағы текстарҙы тыңлау.. Диалогик телмәрҙе үҫтереү: тәҡдим ителгән ситуация буйынса диалогтар төҙөү, диалогтарҙы трансформациялау: өҫтәү һәм дауам итеү. Һорауҙар буйынса һөйләү. Уҡытыусы тәҡдим иткән һүҙлектәрҙән мәғлүмәт эҙләү. «Нимәһеҙ?» һорау формаһын үҙләштереү, дөрөҫ уҡыу оҫталығын үҫтереү. Һайланма уҡыу, башҡорт теленең орфоэпик нормаларын үтәү. «Туған тел донъяһы» порталында интерактив уйындар.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Һүҙҙең тура һәм күсмә мәғәнәһе. Синонимдар. Антонимдар. Омонимдар.

**Мине ураткан донъя**

Телмәрҙе үҫтереү. Яңы һүҙҙәрҙе өйрәнеү, тирә-яҡ донъя тураһында һөйләмдәр төҙөү. Парлап эш: өйрәнелгән текстар буйынса һорауҙар һәм яуаптар төҙөү. “Карға буткаһы” халыҡ байрамы.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Тамырҙаш һүҙҙәр. Исем. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүе.

**Минең яраткан йыл миҙгелем**

Телмәрҙе үҫтереү. Үҫемлектәр, хайуандар донъяһы, Башҡортостан тәбиғәте менән танышыу. Ағастарҙың, үләндәрҙең, бөжәктәрҙең, ҡоштарҙың атамаларын рус телендәге атамалары менән сағыштырып өйрәнеү. Телмәрҙе үҫтереү: әҙер һорауҙар буйынса монологтар һәм диалогтар төҙөү. Аңлау күнекмәләрен камиллаштырыу: төрлө жанрҙағы текстарҙы тыңлау, терәк һүҙҙәр буйынса тыңланған текстың йөкмәткеһен билдәләү. Йыл миҙгелдәре тураһында текстарҙы аңлап уҡыу. Йыл миҙгелдәре, миҙгел күренештәре тураһында таблица һәм анкета тултырыу. Деформацияланған тексты тергеҙеү. “Нардуған” байрамы.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше.

**Минең гардеробым**

Телмәрҙе үҫтереү. Гардероб предметтарын, предмет билдәләрен аңлатҡан яңы һүҙҙәрҙе өйрәнеү, һөйләшеүҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе файҙаланыу, шул һүҙҙәр менән диалогтар һәм монологтар төҙөү. «Сөнки» теркәүесен диалогтарҙа ҡулланыу. Тема буйынса текстар уҡыу, орфоэпик уҡыу күнекмәләрен үҫтереү. Тексты тыңлап ҡабул итеү, тыңланған текст буйынса анкета тултырыу. Яратҡан кейемең тураһында ҡыҫҡа топик төҙөү, тәҡдим ителгән шаблон һәм терәк һүҙҙәр буйынса үҙ кейемеңде һүрәтләү. «Күпме?» һорауын өйрәнеү, һандар менән танышыу, 1-100 иҫәпте ҡабатлау. “Йәшерәм яулыҡ” балалар уйыны.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Сифат. Сифаттарҙың сағыштырыу дәрәжәһе. Алмаш. Алмаштарҙың килеш менән үҙгәреүе. Һан. Төп һәм рәт һандары.

**Мин сәйәхәтсе**

Телмәрҙе үҫтереү. Төрлө ял төрҙәрен билдәләүсе яңы һүҙҙәр менән танышыу, телмәрҙә әүҙемләштереү. Сәйәхәттәр тураһындағы текстарҙы тыңлау, ҡулланылған ҡылымдар буйынса сәйәхәт ваҡытын билдәләү. Тәҡдим ителгән репликаларға ярашлы сәйәхәт тураһында диалогтар һәм топиктар төҙөү. Текстарҙы пауза һәм дөрөҫ интонация менән йүгерек уҡыу, төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәтте эҙләү. Уҡылған тексттың йөкмәткеһен иллюстрацияға, планға таянып һөйләү. Рус теленән башҡорт теленә яраҡлаштырылған текстар тәржемәһе. Ҡылымдың өйрәнелгән замандарын ҡулланып, һүҙбәйләнештәр төҙөү.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Ҡылым. Ҡылымдың заман менән үҙгәреүе: үткән, хәҙерге, киләсәк заман.

Белемде контролләү. Өйрәнелгән материалды ҡабатлау, контроль эш, хаталар өҫтөндә эшләү, проект эштәре

## 4-се класс

**Көн һайын мәктәпкә йөрөйөм**

Телмәрҙе үҫтереү. Үтелгән материалды ҡабатлау, тема буйынса репликалар менән алмашыу, лексиканы тема буйынса яңы һүҙҙәр менән байытыу, диалогтарҙа ятланған клишелар һәм дежур фразалар ҡулланыу. Башҡорт теле, уның төрки телдәр системаһында тотҡан урыны, Башҡортостан Республикаһында уның статусы тураһында дөйөм мәғлүмәттең ҡабатланыуы. «Миңә ниндәй дәрес оҡшай?» һорауын өйрәнеү, яуабын нигеҙләү, схема буйынса һөйләмдәр төҙөү. Башҡорт шағирҙарының һәм яҙыусыларының әҫәрҙәренән өҙөктәр менән танышыу. Башҡорт теленең орфоэпия ҡағиҙәләрен, лексикаһы тураһында дөйөм мәғлүмәттәрҙе өйрәнеү. «Кем? Нимә?», «Мин нимә уҡырға яратам?» тигән һорауға яуап биргән һүҙҙәр менән танышыу, «Мәктәптә нимә тураһында һөйләшәбеҙ?», кәрәкле һүҙ формаларын файҙаланып монологик телмәрҙе үҫтереү, дуҫтар хаҡында диалогтар төҙөү, дуҫтарҙы һүрәтләү, телмәрҙә исемдәрҙе ҡулланыу.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Үтелгән материалды ҡабатлау. Тел тураһында дөйөм мәғлүмәт. Исем һүҙ төркөмө. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше.

**Мин ғаиләмде яратам**

Телмәрҙе үҫтереү. Ғаилә тураһындағы тексты тыңлап аңлау. Туғанлыҡтың яңы терминдары менән танышыу, туғандарҙың исемен, йәшен һорау, тышҡы ҡиәфәтен һүрәтләү, ғаилә тураһында һөйләргә өйрәнеү. Контекст буйынса һүҙҙәрҙең мәғәнәһен билдәләү йәки һүҙлек, Интернет һ.б. ярҙамында асыҡлау. Башҡорт һәм рус шағирҙары, яҙыусыларының әҫәрҙәренән өҙөктәр уҡыу. Баланың ыңғай сифаттарын сағылдырған сифаттар менән танышыу. «Ниндәй?» һорау алмашын файҙаланып, һорауға яуап әҙерләү. Өйҙө, бүлмәне һүрәтләү, телмәрҙә сифаттарҙы ҡулланыу, дәрес темаһы буйынса һорауҙар бирә белеү. Һөйләшә, яңынан һорай, телмәрҙә ятлаған һүҙҙәрҙе һәм һүҙ формаларын ҡуллана, русса-башҡортса һүҙлекте файҙаланып, үҙҙәренең өйҙәге йөкләмәләре тураһында текст төҙөй белеү. “Сөмбөлә” байрамы (уңыш байрамы).

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Исемдәрҙең эйәлек аффикстары менән үҙгәреүе. Сифат дәрәжәләре тураһында үтелгәнде ҡабатлау. Сифаттарҙың яҙылышы.

**Ватаным тураһында һөйләйем.**

Телмәрҙе үҫтереү. Яңы лексика менән танышыу, уны телмәрҙә әүҙемләштереү. Урамыбыҙ, тыуған йортобоҙ, ҙур һәм бәләкәй Ватаныбыҙ, планетабыҙҙың ҡояш системаһында тотҡан урыны тураһында текстар төҙөү. Тыуған яҡтың яратҡан урындары, үҙ ихатаһының балалары тураһында хикәйәләү. Башҡорт һәм рус шағирҙары, яҙыусыларының әҫәрҙәрен, башҡорт фольклоры өлгөләрен уҡыу. Шаблон буйынса һәм шаблонһыҙ ҡыҫҡа текстар һәм диалогтар төҙөү, үҙ фекереңде белдерә белеү. ”Тирмә” балалар уйыны. Төрлө платформаларҙа эшләү (LearningApps, ЯКласс).

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Алмаш. Алмаштар тураһында өйрәнелгән материалдың ҡабатланыуы. Зат, күрһәтеү, эйәлек, һорау алмаштары. Алмаштарҙы дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре.

**Ауылда/ҡалала йәшәйем**

Телмәрҙе үҫтереү. Тема буйынса яңы һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр үҙләштереү, Башҡортостандың, Өфөнөң иҫтәлекле урындары менән танышыу. Ауыл һәм ҡала тормошо тураһында әңгәмә, диалог ҡороу, ауыл/ҡала тураһында бәйләнешле текстар төҙөй белеү. Республика ҡалалары һәм ауылдары, баҡсалағы үҫемлектәр тураһында хикәйәләр. Өйрәнелгән һүҙҙәрҙе файҙаланып, үҙенең районы һәм республикаһының иҫтәлекле урындары тураһында текстар төҙөү. Төрлө платформаларҙа эшләү (LearningApps, ЯКласс).

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Һан (өйрәнелгән материалдың ҡабатланыуы). Ябай һәм составлы һандар. Һандарҙың разряды: рәт, йыйыу, тәртип һандары. Һандарҙы дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре.

**Һауа торошо һәм йыл миҙгелдәре тураһында һөйләшәбеҙ.**

Телмәрҙе үҫтереү. Ҡыҙыл китапҡа индерелгән үҫемлектәрҙе һәм хайуандарҙы, йыл миҙгелдәре атамаларын өйрәнеү. Яңы лексиканы

үҙләштереү, тәҡдим ителгән текстар буйынса эшләү, тәбиғәттә үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре, тыуған төйәктең тәбиғәтен һаҡлау тураһында яңы текстар төҙөү. Балаларҙың ҡышҡы, яҙғы, йәйге, көҙгө уйындары. Йолалар һәм ғөрөф-ғәҙәттәр тураһында әңгәмәләр. Был йолаларҙың бөгөнгө көндәге әһәмиәте. .Телмәрҙе тыңлай белеү, текстарҙы дөрөҫ уҡыу, тема буйынса диалог ҡороу һәләтен үҫтереү.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Рәүеш. Рәүештәрҙең сифаттарҙан айырмаһы

**Төрлө нәмәләр тураһында һөйләшәбеҙ.**

Телмәрҙе үҫтереү. Киләсәккә пландар тураһында текстарҙы тыңлап аңлау. Тема буйынса яңы лексиканы үҙләштереү, уларҙы телмәрҙә әүҙемләштереү, киләсәккә пландар, үҙ хыялың тураһында текстар төҙөү. Әҙер өлгө буйынса, терәк һүҙҙәргә таянып, диалог төҙөү. Төрлө платформаларҙа эшләү. “Һабантуй” байрамы.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Ҡылым. Һөйләмдә ҡылымдарҙың урыны. Ҡылымдарҙың зат менән үҙгәреүе.

**Һатып алырға өйрәнәм.**

Телмәрҙе үҫтереү. Аҙыҡ-түлек, кейем-һалым атамалары менән танышыу, тауар һатып алғанда этикет ҡағиҙәләрен үҙләштереү, был тема буйынса аралашыу. Телмәрҙә хәҙерге заман ҡылымдарын ҡулланып, мода тураһында текстар төҙөү. Тәҡдим ителгән диалогтар буйынса эш, өлгө буйынса диалогтар төҙөү, өйрәнелгән лексиканы әүҙемләштереү. Аралашыу барышында башҡорт телмәр этикеты үҙенсәлектәрен һаҡлау. Тәҡдим ителгән тема буйынса текстар яҙыу. Планға һәм терәк һүҙҙәргә таянып, ҡыҫҡа хикәйәләр төҙөү. Төрлө мәғлүмәт сығанаҡтарын эҙләү, схемалар ҡулланыу, хаталарҙы төҙәтеү. “Буяу һатам” балалар уйыны.

Лингвистик белем нигеҙҙәре. Ҡылым. Ҡылымдың кире формаһы. Ҡылымдың замандары. Үтелгән материалды ҡабатлау.

Белемде контролләү. Өйрәнелгән материалды ҡабатлау, контроль эш, хаталар өҫтөндә эшләү, проект эштәре.

## “БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ДӘҮЛӘТ (БАШҠОРТ) ТЕЛЕ” УҠЫУ ПРЕДМЕТЫН БАШЛАНҒЫС ДӨЙӨМ БЕЛЕМ БИРЕҮ КИМӘЛЕНДӘ ҮҘЛӘШТЕРЕҮҘЕҢ ПЛАНЛАШТЫРЫЛҒАН ҺӨҘӨМТӘЛӘРЕ

ШӘХСӘН ҺӨҘӨМТӘЛӘР

Башланғыс мәктәпте тамамлаусы уҡыусыларҙың “Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле” уҡыу предметын үҙләштереүенең **шәхсән һөҙөмтәләре:**

- уҡыусыларҙың рухи ҡиммәттәргә таянып эш итергә әҙер булыуы һәм түбәндәге өлкәләрҙә шуларға нигеҙләнгән тәүге эшмәкәрлек тәжрибәһен туплауы:

*Граждандлыҡ-патриотик тәрбиәлә:*

– Тыуған иленә – Рәсәйгә, йәнтөйәгенә, тыуған еренә, тәбиғәткә ихтирамлы мөнәсәбәте, һөйөүе һәм хөрмәт итеүе;

– дәүләт (башҡорт) телен тирә-яҡты танып-белеү ҡоралы итеп таныуы;

– донъяны күп телле һәм күп мәҙәниәтле йәмғиәт итеп ҡабул итеүе, үҙен Рәсәй Федерацияһының гражданины итеп тойоп, халҡының һәм Рәсәйҙең гражданины булыуын аңлауы;

– тыуған илебеҙҙең, республиканың үткәненә, бөгөнгөһөнә һәм киләсәгенә битараф булмауы;

– үҙ халҡын һәм шул уҡ ваҡытта башҡа халыҡтарҙы ихтирам итеүе, икенсе халыҡтарҙың тарихына, мәҙәниәтенә хөрмәт менән ҡарауы, төрлө милләт вәкилдәренә ыңғай ҡарашы;

– һәр кешене йәмғиәтебеҙҙең вәкиле итеп ҡабул итеүе, мөнәсәбәттәрҙе әҙәп-әхлаҡ ҡанундарына таянып ҡороуы.

*Әҙәп-әхлаҡ тәрбиәһендә:*

- һәр кешенең шәхес булыуын таныуы;

- башҡаларға ҡарата иғтибарлы һәм ихтирамлы булыуы;

- кешеләргә физик һәм әхлаҡи зыян килтереүгә йүнәлтелгән ҡылыҡтарҙы ҡабул итмәүе;

- әхлаҡи тәртип ҡағиҙәләрен белеүе: оялыу, ғәфү үтенеү, тартыныу һ.б.

- уҡыу һөҙөмтәләре, эшләгән эштәрең өсөн яуаплылыҡ тойоуы;

*Эстетик тәрбиәлә:*

- үҙ халҡының һәм башҡа халыҡтарҙың традицияларына һәм ижадына, төрлө сәнғәт төрҙәренә, мәҙәниәткә ҡыҙыҡһыныуы, уларҙы хөрмәт итеүе;

- художестволы эшмәкәрлек төрҙәре аша үҙ-үҙен танытыуға ынтылышы;

*Фәнни белемдең ҡиммәттәре:*

- танып-белеүҙә үҙ аллылығы, ҡыҙыҡһыныусанлығы, әүҙемлеге, инициативалылығы;

- дөйөм күҙалллауының, фекерләүенең, хәтеренең үҫеше.

Ошо һөҙөмтәләргә ирешеү сараһы булып дәреслектең текстары, тексҡа бирелгән һорауҙар һәм биремдәр, эшмәкәрлек нигеҙендә уҡытыу технологияһы һ.б. тора.

## МЕТАПРЕДМЕТ ҺӨҘӨМТӘЛӘРЕ

Уҡыусыларҙың “Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле” уҡыу предметын үҙләштереүенең метапредмет һөҙөмтәләре булып түбәндәге универсаль уҡыу эшмәкәрлеге төрҙәренең формалашҡан булыуы тора.

**Танып-белеү универсаль эшмәкәрлеге**

*Нигеҙ логик эшмәкәрлек:*

- төрлө тел берәмектәрен сағыштырыу, оҡшаш һәм айырмалы яҡтарын табыу;

- уҡыу мәсьәләһен сисеү өсөн кәрәкле мәғлүмәтте эҙләп таба белеү, әҙер алгоритм буйынса эште ойоштороу;

*Нигеҙ тикшеренеү эшмәкәрлеге:*

- уҡытыусы ярҙамында маҡсатты билдәләү, телмәр ситуацияһын үҙгәртеүҙе планлаштырыу;

- төрлө эш варианттарын сағыштырыу, әҙер планға таянып проект төҙөү;

- тел материалын күҙәтеү нигеҙендә һығымталар яһау һәм уларҙы иҫбатлау;

*Мәғлүмәт менән эшмәкәрлек:*

- мәғлүмәт сығанағын һайлай, кәрәкле һүҙлекте таба белеү;

- бирелгән алгоритм буйынса тәҡдим ителгән мәғлүмәтте күрһәтелгән сығанаҡтарҙан таба белеү;

- уҡытыусы тәҡдим иткән ысул менән тикшереп, дөрөҫ мәғлүмәтте ялған мәғлүмәттән айыра белеү;

- Интернеттан мәғлүмәт эҙләүҙә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен үтәү;

- уҡыу мәсьәләһенә ярашлы мәғлүмәтте анализлау һәм текст итеп, график форматта, аудио аша бирергә өйрәнеү;

- таблица, схема аша бирелгән лингвистик мәғлүмәтте аңлау, үҙ аллы төҙөлгән таблица ярҙамында мәғлүмәтте еткереү.

Башланғыс мәктәпте тамамлауға, уҡыусыларҙа түбәндәге **коммуникатив универсаль уҡыу күнекмәләре** формалаша:

*Аралашыу*:

- таныш мөхиттә аралашыу шарттары һәм маҡсаттарына ярашлы, хис-тойғоларҙы сағылдыра белеү, әңгәмәсегә ихтирам менән ҡарау, диалог алып барыу ҡағиҙәләрен теүәл үтәү;

- төрлө ҡараштар булыуын таныу;

- үҙ фекереңде матур итеп әйтә һәм иҫбатлай белеү;

- телмәр ситуацияһына ярашлы телдән телмәр өлгөһө төҙөй белеү;

- проект төҙөүҙә, тикшеренеү эше барышында парлап һәм төркөмләп эшләүҙең һөҙөмтәләре тураһында сығыш яһай белеү,

- сығыш өсөн иллюстратив материал һайлай белеү.

*Уртаҡ эшмәкәрлек:*

- стандарт ситуацияларҙа уҡытыусы ярҙамында ҡыҫҡа ваҡытлы һәм оҙайлы маҡсаттар ҡуя белеү;

- уртаҡ эшмәкәрлектең маҡсатын ҡабул итеү, ролдәрҙе бүлешеү, эшмәкәрлек барышында һөйләшә һәм килешә белеү;

- етәкселек итергә һәм буйһона белергә, конфликтты үҙ аллы сисергә әҙер булыу;

- эштең бүленгән өлөшөн яуаплы итеп башҡара һәм дөйөм һөҙөмтәгә индергән өлөшөңдө баһалай белеү;

- тәҡдим ителгән өлгөгә ярашлы бергәләп проект эштәрен башҡара белеү.

**Регулятив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге**

*Үҙеңде ойоштороу:*

- уҡыу эшмәкәрлегенең маҡсатын үҙ аллы билдәләй, эштең эҙмә-эҙлелеген, һөҙөмтәләрҙе баһалай белеү;
- һөҙөмтәгә ирешеү өсөн уҡыу мәсьәләһен сисеүҙе планлаштыра белеү;
- уҡытыусы менән берлектә уҡыу проблемаһын сисеүҙең планын төҙөү;
- дәрестең маҡсатына ярашлы план буйынса эшләү, хаталарҙы төҙәтә белеү;
- эшмәкәрлектең эҙмә-эҙлелеген төҙөй белеү.

*Үҙ-үҙеңде контролләү:*

- уҡыу эшмәкәрлегендәге уңыштарҙы һәм уңышһыҙлыҡ сәбәптәрен анализлай, телмәр хаталарын һәм орфографик хаталарҙы төҙәтә белеү;

- уҡытыусы менән диалог барышында эште баһалауҙың критерийҙарын асыҡлау, шул критерийҙарға ярашлы үҙеңдең һәм иптәштәреңдең эшен баһалай белеү;

– мәғлүмәт сығанаҡтарындағы күрһәтмәләргә ярашлы эшләй белеү, эште планлаштырыуҙа һәм контроллəүҙә ҡағиҙәләрҙе иҫтә тотоу;

– телдән һәм яҙма телмәрҙә эш алымдарын белеү;

– иптәштәреңдең һәм уҡытыусының эшеңә биргән баһаһын аңлап ҡабул итеү.

**Предмет һөҙөмтәләре**

«Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле» предметы буйынса предмет һөҙөмтәләре башланғыс дөйөм белем биреү кимәлендә түбәндәгеләрҙе тәьмин итә:

- Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теленең статусын һәм әһәмиәтен аңлау, Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) телен өйрәнеүгә мотивация булдырыу: милләт-ара аралашыу өсөн Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теленең әһәмиәтен аңлау.

- дәүләт (башҡорт) теленең фонетикаһы, лексикаһы, грамматикаһы, орфографияһы һәм пунктуацияһы тураһында башланғыс белемдең формалашыуы, шулай уҡ алған белемде телмәр эшмәкәрлегендә: башҡорт теленең өндәрен һәм һүҙҙәрен тел нормаларына ярашлы, фонетик хатаһыҙ әйтеү һәм һөйләү; телмәрҙә өйрәнелгән материал сиктәрендә үҙләштерелгән лексиканы ҡулланыу; күләме буйынса ҙур булмаған диалогтар төҙөү; телмәр этикетының өйрәнелгән формулаларын файҙаланып, телмәр аралашыуында ҡатнашыу;

- дәүләт (башҡорт) телендә телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәренең формалашыуы һәм үҫеше:

Тыңлау (тыңлау): төрлө сығанаҡтарҙан яңғыраған телмәргә төшөнөү (уҡытыусы, класташтар, теле- һәм радиотапшырыуҙар);

Һөйләшеү: телмәр өлгөләрен тергеҙеү, көнкүреш, уҡыу темаларына диалогтарҙа, тыңлаған йәки уҡыған текстар буйынса фекер алышыуҙа ҡатнашыу; шиғырҙарҙы яттан һөйләү;

Уҡыу: өйрәнелгән тел материалында төҙөлгән ҙур булмаған текстарҙы ҡысҡырып уҡыу;

Яҙыу: телмәр өлгөләрен күсереп яҙыу, тексты һүрәтләү һәм унан һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, уҡыу мәсьәләһенә ярашлы һөйләмдәр яҙырға; ҙур булмаған яҙма эштәрҙе һәм ижади эштәрҙе башҡарыу.

**Предмет һөҙөмтәләре**

*“Башҡортостан Республикаһының дәүләт (башҡорт) теле” уҡыу предметын **1-се класта** өйрәнеүҙең һөҙөмтәләре*

**Лингвистик белем нигеҙҙәре**

Уҡыусы түбәндәгеләрҙе өйрәнә:

- башҡортса өндәрҙе һәм хәрефтәрҙе айырырға, өндәргә ҡылыҡһырлама бирергә: һаңғырау/яңғырау, парлы/парһыҙ, бирелгән нигеҙ буйынса өндәрҙе төркөмләргә; һүҙҙең, һөйләмдәрҙең өн схемаһын төҙөү;

Уҡытыу өсөн төп төшөнсәләрҙе билдәләргә: һүҙ, өн, һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр, өн билдәһе, квадрат, түңәрәк йәки хәреф;

- башҡорт алфавиты хәрефтәрен атарға, башҡорт теленең үҙенсәлекле хәрефтәрен һәм өндәрен рус теле менән сағыштырырға;

- һөйләмдәрҙә, текстарҙа йәки диалогтарҙа төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе өҫтәп яҙырға;

- һөйләм башында ҙур хәреф яҙыуҙы һәм исемдәрҙе, һөйләм аҙағындағы нөктәне, интонация буйынса һорау йәки өндәү тамғаһын асыҡларға;

- раҫлау, һорау һәм өндәү һөйләмдәрҙе билдәләргә;

- башҡорт телендәге тексты күсереп алырға, уға кәрәкле һүҙҙәр өҫтәргә;

- өлгө буйынса таблица, ябай анкета тултырырға.

**Телмәр үҫтереү**

Уҡыусы түбәндәгеләрҙе өйрәнә:

- уҡытыусының, класташтарының һорауҙарына яуап бирергә, күргәҙмәлеккә таянып, ябай текстарҙың мәғәнәһен аңларға;
- уҡытыусының аңлатмаларын, таныш лексик-грамматик материалға таянып төҙөлгән текстарҙың йөкмәткеһен ишетергә һәм аңларға;

- тематик һәм сюжетлы һүрәттәр, өйрәнелгән лексик темаларға бирелгән ситуация буйынса 4-6 репликанан торған диалог алып барырға.
- - Ә, Ө, Е һуҙынҡыларын, асыҡ һәм ябыҡ типтағы ижектәрҙе, дифтонгыларҙы уҡыу, яҙыу ҡағиҙәләрен белергә;
- һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлергә, һүҙҙәге ижектәрҙең һанын билдәләргә;
- һүҙҙәрҙә һәм фразаларҙа дөрөҫ баҫымды, дөйөм интонацияны һаҡларға;
- һөйләмдә һүҙ тәртибен дөрөҫ төҙөргә; телмәр этикеты ҡағиҙәләрен файҙаланырға (башланғыс кимәлдә);
- репликаларҙы башҡортсанан руссаға тәржемә итергә;
- балалар фольклоры әҫәрҙәрен, шиғырҙарҙы һәм йырҙарҙы яттан һөйләргә;
- өлгө буйынса предметтың, һүрәттең бәләкәй генә тасуирламаһын яҙырға;
- тексҡа, һүрәткә ҡағылышлы һорауҙарға яуап бирергә;

**2-се класс**

**Лингвистик белем нигеҙҙәре**

Уҡыусы түбәндәгеләрҙе өйрәнә:

- күнегеүҙәр эшләгәндә алфавитты файҙаланырға;

- текстан һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, ябай һөйләмдәрҙе яҙып алырға;

- бирелгән һүҙъяһалыш моделдәре буйынса яңы һүҙҙәр яһарға (тамыр +сы, -се: балыҡ-сы, яҙыу-сы, ҡурай –сы, төҙөү -се, бейеү -се, теген -се);

- һүҙҙе, һөйләмде, деформацияланған тексты тергеҙергә;

- һөйләмдең баш киҫәктәрен дөрөҫ билдәләргә;

- һөйләм аҙағында тыныш билдәһен дөрөҫ ҡуйырға;

- исемдәрҙе һан һәм зат менән үҙгәртергә;

- алмаштарҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға;

- сифаттарҙың, ҡылымдарҙың мәғәнәһен дөрөҫ билдәләргә һәм уларҙы телмәрҙә ҡулланырға;

- һүҙлек диктанттарын яҙырға;

- кәрәкле һүҙҙәрҙе ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙырға;

- өлгө буйынса таблица тултырырға.

**Телмәр үҫтереү**

Уҡыусы түбәндәгеләрҙе өйрәнә:

- башҡорт теленең өндәрен, һүҙҙәрен, һүҙбәйләнештәрен, һөйләмдәрен, һөйләмдәрҙең интонацияһын һәм хис-тойғоларға бай булыуын айырырға һәм уларҙы аңларға;

- үҙе, ғаиләһе, дуҫы, мәктәбе тураһында ҡыҫҡаса һөйләргә;

- планға ярашлы картина буйынса ҡыҫҡа хикәйә яҙырға;

- терәк һүҙҙәр буйынса, планға ярашлы, тексты һайлап һөйләргә;

- диалогтар һәм ҙур булмаған монологтар төҙөргә; өйрәнелгән һорауҙар бирергә һәм уларға яуап ҡайтарырға;

**3-сө класс**

**Лингвистик белем нигеҙҙәре**

Уҡыусы түбәндәгеләрҙе өйрәнә:

- эйәлек килештәге исемдәр менән һүҙбәйләнештәр төҙөргә;

- синонимдарҙы, антонимдарҙы, омонимдарҙы айырырға;

- төрлө һүҙлектәрҙән кәрәкле мәғлүмәтте табырға;

- һүҙҙәрҙең тура һәм күсмә мәғәнәһен аңларға;

- алмаштарҙы килештәр менән үҙгәртергә;

- башҡорт һәм рус телдәрендә сифаттарҙың айырмаһын билдәләргә; телмәрҙә сифаттарҙы дөрөҫ ҡулланырға;

- ҡылымдарҙы заман менән үҙгәртергә (хәҙерге, үткән, киләсәк);

- һандың мәғәнәһен билдәләргә һәм телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға;

- һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен айырырға.

- тыңланған текст буйынса анкета тултырырға.

**Телмәр үҫтереү**

Уҡыусы түбәндәгеләрҙе өйрәнә:

- 3-6 һөйләмдән (репликанан) торған диалогты аңларға һәм уны дауам итергә;

- тыңлаған текст буйынса һөйләмдәрҙе тулыландырырға;

- үтелгән тема буйынса дәртләндереү характерындағы диалог алып барырға һәм монолог төҙөргә;

- бәләкәй текстарҙы тасуири уҡырға һәм уларҙың йөкмәткеһен аңларға;

- -һорауҙар буйынса тексты һөйләргә;

- һөйләмдәрҙе башҡорт теленән рус теленә тәржемә итергә;

- текст менән эшләргә: исем бирергә, тәҡдим ителгән текстарға план төҙөргә;

- дуҫҡа ҡыҫҡа хат яҙырға (өйрәнелгән тематика сиктәрендә);

**4-се класс**

**Лингвистик белем нигеҙҙәре**

Уҡыусы түбәндәгеләрҙе өйрәнә:

- -исемдәрҙең килеш формаларын, эйәлек аффикстарын айырырға;
- тәртип, йыйыу һандарын айырырға, уларҙы телмәрҙә ҡулланырға;
- ябай һәм ҡушма һандарҙы айырырға, уларҙы телмәрҙә ҡулланырға;
- сифаттарҙы рәүештәрҙән айырырға;
- һөйләмдәрҙә ҡылымдарҙың заман формаларын айырырға, һөйләмдәге урынын билдәләргә;
- телмәрҙә һәм яҙыуҙа ҡылымдарҙың кире формаһын ҡулланырға;
- - күрһәтелгән схема буйынса һөйләмдәр төҙөргә;
- ҙур булмаған диктант яҙырға;

**Телмәр үҫтереү**

Уҡыусы түбәндәгеләрҙе өйрәнә:

- диалог ҡорорға, ҡабатлап һорарға,

- телмәрҙә ятланған һүҙҙәрҙе һәм һүҙ формаларын ҡулланырға; өйрәнелгән һорауҙарға яуап бирергә;

- орфоэпия ҡағиҙәләрен үтәп йүгерек уҡырға;

- һүҙҙең мәғәнәһен текст буйынса билдәләргә йәки һүҙлек, Интернет һ.б. ярҙамында аныҡларға;

- бирелгән тема буйынса ҙур булмаған текстар һәм монологтар төҙөргә;

- планға һәм терәк һүҙҙәргә таянып ҡыҫҡа хикәйәләр яҙырға;

- уҡыу һәм көндәлек аралашыу шарттарында телмәр этикеты нормаларын файҙаланырға;

- өйҙәге бурыстары тураһында русса-башҡортса һүҙлекте файҙаланып, текст яҙырға;

- өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, телмәрҙең өйрәнелгән өлөштәрен файҙаланып, тема буйынса текст төҙөргә.

**Тематик планлаштырыу**

**1 –се класс (34 сәғәт)**

| **Тел бүлеге, тема** | **Программа йөкмәткеhе** | **Уҡыусыларҙың төп эшмәкәрлек төрө** |
|---|---|---|
| **Телмәргә әҙерләү курсы**<br>**(5 сәғәт)** | «Башҡортостан - минең тыуған ерем».<br>Тел тураhында дөйөм төшөнсә | Уҡытыусы, дәреслек менән танышыу. Күп милләтле Башҡортостан Республикаhы, дәүләт (башҡорт) теле тураhында әңгәмә. Башҡортостан Республикаhының hәм Рәсәй Федерацияhының дәүләт символдары менән танышыу. Башҡортостан Республикаhы Рәсәй Федерацияhы картаhында. Башҡортостан тураhында видеоролик ҡарау. |
| | «Иҫәнләшергә өйрәнәбеҙ».<br>Һөйләү hәм яҙма телмәр | Ҡыҫҡа сәләмләү репликаларын тыңлап аңларға өйрәнеү. Сәләмләү hүҙҙәренә өйрәтеү, уҡытыусы артынан телмәр формаларын ҡабатлау. Башҡорттарҙа, рустарҙа, татарҙарҙа, сыуаштарҙа, удмурттарҙа, мариҙарҙа, мордваларҙа h.б. сәләмләү йолалары тураhында мәғлүмәт. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен әйтергә өйрәнеү [h, ғ, ҙ]. Рәсемдәрҙе ҡарау hәм әкиәт геройҙарын билдәләү. Эш дәфтәрҙәрендә яҙылған хәреф, биҙәк элементтарын яҙыу. Һөйләү hәм яҙма телмәр араhындағы айырмаларҙы билдәләү. |
| | «Әйҙәгеҙ, танышайыҡ».<br>«Исемең кем?» - hорауын | Танышыу репликаларын аңларға өйрәнеү. Уҡытыусы артынан телмәр клишеларын ҡабатлау. Тексты hөйләмдәргә, hөйләмдәрҙе hүҙҙәргә, hүҙҙәрҙе ижектәргә тарҡатыу. «Исемең кем?» тигән hорауҙы өйрәнеү, яуап ҡороу. Башҡорттарҙа танышыу йолалары тураhында мәғлүмәт. |

| | | |
|---|---|---|
| | үҙләштерергә һәм яуап ҡорорға өйрәнеү. Һөйләм һәм һүҙ | Һөйләмдәрҙә һүҙҙәр һанын билдәләү. |
| | «Әйҙәгеҙ, танышайыҡ». һорауын үҙләштереү. Яуап бирергә өйрәнеү. Ижек, өн һәм хәреф | Ҡыҫҡа ғына танышыу диалогтарын тыңлап аңларға өйрәнеү. «Һин кем?» һорауын үҙләштереү һәм яуап ҡайтарырға өйрәнеү. Һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеү, һүҙҙәге ижектәр һанын билдәләү, айырым өндәрҙе (һуҙынҡылар һәм тартынҡылар) айырыу. Һүҙҙә өндәр һанын, уларҙың характерын, эҙмә-эҙлелеген билдәләү, схема-моделен төҙөү. |
| | «Әйҙәгеҙ, танышайыҡ». «Был кем?», «Был нимә?» Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре [ә, ө, ү] | «Һин кем?» тигән һорауын өйрәнеү, яуап төҙөү, телмәрҙе әүҙемләштереү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле һуҙынҡы өндәрен өйрәнеү [ә, ө, ү]. Өндәрҙе характер билдәләре (айырым һәм һүҙ составында, төрлө позицияларҙа) буйынса билдәләү, хәрефтәр менән тамғалау. Дәреслектең һүрәттәре менән эшләү, сюжет нигеҙен асыҡлау, һүрәттең һәр персонажын табыу һәм билдәләү. Рәсемдәр буйынса ҡыҫҡа һөйләмдәр төҙөү, уларҙы төҙөлгән схемалар менән сағыштырыу. |
| **Мин танышам (5 сәғәт)** | Алфавит. *Аа* хәрефен өйрәнеү | Дәрес темаһы буйынса диалог тыңлау. Дәреслектең иллюстрациялары менән эш. «Хәйерле көн!», «Осрашҡанға тиклем!» телмәр клишеларын үҙләштереү, уларҙы телмәрҙә әүҙемләштереү. Башҡорт теленең алфавиты менән танышыу. *А* хәрефен өйрәнеү, башҡорт һәм рус телдәрендә был |

| | | |
|---|---|---|
| | | өндәрҙең әйтелешендә айырмаларҙы билдәләү, һүҙҙең өн схемаһын төҙөү. Эш дәфтәрҙәрендә Аа хәрефен яҙыу. |
| | «Һау булығыҙ!». *Оо* хәрефен өйрәнеү | Исәнләшеү һәм хушлашыу: «Сәләм!», «Һау булығыҙ!». Телмәр клишеһын ҡулланыу, телмәр этикеты ҡағиҙәләрен үҙләштереү. *Оо* хәрефен өйрәнеү, башҡорт һәм рус телдәрендә был өндәрҙең әйтелешендә айырмаларҙы билдәләү, һүҙҙең өн схемаларын төҙөү. Эш дәфтәрҙә Оо хәрефен яҙыу. Дәреслек буйынса әкиәт иллюстрациялары менән эшләү. |
| | *Ыы* хәрефен өйрәнеү | Танышыу тураһындағы диалогтар тыңлау, һорауҙарға яуап биреү. Парлап яңы диалог төҙөү. Башҡорт теленең яңы үҙенсәлекле өндәре менән танышыу: ғ, ç, ң, әйтелештәрен нығытыу. *Ыы* хәрефен өйрәнеү, был өндө әйтеүҙә башҡорт һәм рус телдәрендәге айырмаларҙы билдәләү. Һүҙҙәрҙең, һөйләмдәрҙең схемаларын төҙөү. Эш дәфтәрҙәрендә *Ыы* хәрефен яҙыу, төрлө эштәрҙе башҡарыу. |
| | *Ээ* хәрефен өйрәнеү | Танышыу тураһында ҡыçҡа репликаларҙы тыңлау, яңы лексиканы үҙләштереү. «Һинә нисә йәш?» һорауын өйрәнеү һәм «Минә... йәш» тип яуап төҙөү, телмәрҙе әүҙемләштереү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен ҡабатлау. 1 - 10 иçәбен өйрәнеү. *Ээ* хәрефен өйрәнеү, башҡорт һәм рус телдәрендә был өндәрҙең әйтелешендә айырмаларҙы билдәләү. Һүҙҙең өн схемаһын, һөйләмдәр схемаһын төҙөү. Өйрәнелгән хәрефте яҙыу, эш дәфтәрҙәрендәге эштәрҙе башҡарыу. |

| | | |
|---|---|---|
| | *Вв* (у)хәрефен өйрәнеү<br>Телмәр үҫтереү | Сюжетлы картина буйынса һөйләмдәр төҙөү, өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, өндәрҙе ҡабатлау, уҡытыусы тәҡдим иткән һөйләмдәрҙең схемаларын төҙөү. *Вв* хәрефен өйрәнеү, башҡорт һәм рус телдәрендә был өндәрҙең әйтелештәге айырмаларҙы билдәләү, эш дәфтәрҙәрендә яҙыу, бирелгән күнегеүҙәрҙе эшләү. |
| **Мин һәм минең ғаиләм**<br>**(5сәғәт)** | *Әә* хәрефен өйрәнеү | 2-3 репликанан торған ҡыҫҡа диалогты тыңлау, йөкмәткеһе тураһында әңгәмәләшеү. Тема буйынса яңы һүҙҙәр менән танышыу, телмәрҙә үтелгән лексиканы әүҙемләштереү. Өлгө буйынса үҙе тураһында топик төҙөргә өйрәнеү. **[Ә]** өнөн өйрәнеү, һүҙ башында, уртаһында һәм аҙағында өндәрҙең урынын билдәләү. Өйрәнелгән хәрефте эш дәфтәрҙәрендә яҙыу. Парҙарҙа һүҙҙәрҙең схемаһын төҙөү, эштәрҙе баһалау. |
| | *Өө* хәрефен өйрәнеү | Ғаилә тураһында диалогты диалогты тыңлау, йөкмәткеһе тураһында әңгәмәләшеү. Ғаилә ағзаларының исемдәре менән танышыу, телмәрҙә яңы һүҙҙәрҙе әүҙемләштереү. Өйрәнелгән башҡорт алфавиты хәрефтәрен ҡабатлау. *Өө* хәрефен өйрәнеү, эш дәфтәрҙәрендә хәрефте яҙыу. Һүҙ схемаларын төҙөү буйынса төркөмдәрҙә эш. |
| | *Үү* хәрефен өйрәнеү | Ғаилә тураһында ҡыҫҡа репликаларҙы тыңлау, репликаларҙың йөкмәткеһе буйынса һорауҙарға яуап биреү. Тема буйынса өйрәнелгән һүҙҙәрҙе ҡабатлау, телмәрҙә лексиканы әүҙемләштереү. Үҙ ғаиләһе тураһында һөйләмдәр төҙөү, өйрәнелгән хәрефтәрҙе ҡабатлау. *Үү* хәрефен өйрәнеү, эш дәфтәрҙәрендә хәрефте яҙыу. [Ү] өнө булған |

| | | |
|---|---|---|
| | | тиҙәйткестәрҙе ҡабатлау. Дәреслектең иллюстрациялары менән эшләү. |
| | *Һh* хәрефен өйрәнеү | Дәрес темаһы буйынса аудиотексты тыңлау, йөкмәткеһе тураһында һорауҙарға яуап биреү. Яңы һүҙҙәр менән танышыу, телмәрҙә яңы лексиканы әүҙемләштереү. Үҙ ғаиләһе тураһында өлгөгә таянып һөйләмдәр төҙөү. Һh (әйтелештә х өнө менән сағыштырыу) хәрефен өйрәнеү. Өйрәнелгән хәрефте эш дәфтәрҙәрендә яҙыу. Һүҙҙәр һәм һөйләм схемалары төҙөү, эш дәфтәрҙәрендә эштәрҙе башҡарыу. |
| | Телмәр үҫтереү | Төркөмдә эш: сюжетлы картина буйынса һөйләмдәр, һүҙҙәр һәм һөйләмдәрҙең схемаһын төҙөү, һүҙҙәргә өн анализы яһау. Ғаилә тураһында диалог һәм 2-3 һөйләмдән торған ҡыҫҡа монолог ҡороу. Ғаилә тураһында проект төҙөү. |
| Мәктәптәге тормошом<br>(7 сәғәт) | *Ғғ* хәрефен өйрәнеү | Ғаилә ағзалары тураһында аудиояҙма тыңлау, тыңлаған текст буйынса һорауҙарға яуап биреү. Тема буйынса яңы һүҙҙәр менән танышыу. Бирелгән клише буйынса ҡыҫҡа диалогтар ҡороу, һорауҙар һәм уға яуаптар. Ғғ хәрефе менән танышыу, эш дәфтәрҙәрендә өйрәнелгән хәрефте яҙыу. Таныш хәрефтәр менән ижектәр уҡыу, һүҙҙәрҙең өн моделен төҙөү. |
| | *Ҡҡ* хәрефен | Мәктәп тураһындағы тексты тыңлап аңлау, тыңланған текст буйынса һорауҙарға яуап биреү. Тема буйынса яңы һүҙҙәр менән танышыу, |

| | | |
|---|---|---|
| | өйрәнеү | уларҙы телмәрҙә әүҙемләштереү. Бирелгән өлгө буйынса ҡыҫҡа диалогтар ҡороу, һорауҙарға яуап биреү. *Ҡҡ* хәрефе менән танышыу, эш дәфтәрҙәрендә өйрәнелгән хәрефте яҙыу. Ижектәр һәм һүҙҙәр уҡыу, дәреслектең һүрәттәре менән эшләү. |
| | *Ҙҙ* хәрефен өйрәнеү | Класс тураһындағы тексты тыңлау, йөкмәткеһе буйынса һорауҙар. Уҡыу-уҡытыу кәрәк-ярағтарын белдереүсее яңы һүҙҙәр менән танышыу, уларҙы телмәрҙә әүҙемләштереү. Бирелгән клише буйынса ҡыҫҡа диалог ҡороу, тема буйынса һорауҙарға яуап биреү. *Ҙҙ* хәрефен эш дәфтәрендә яҙыу. Тренажер ярҙамында ижектәр уҡыу. |
| | Ҫ хәрефен өйрәнеү | Төҫтәрҙе аңлатҡан яңы һүҙҙәр менән танышыу, уларҙы телмәрҙә әүҙемләштереү. Бирелгән клише буйынса ҡыҫҡа диалог ҡороу, ҫ хәрефен өйрәнеү, эш дәфтәрҙәрендә яҙыу. Дөрөҫ уҡыу күнекмәләрен үҫтереү. Үҙ эшеңде һәм класташтарыңдың эшен баһалау. |
| | Ң хәрефен өйрәнеү | Аудиотекст тыңлап, йөкмәткеһе тураһында әңгәмәләшеү. Өйрәнелгән лексиканы файҙаланып, тема буйынса диалог төҙөү. Дәреслектәге тексты уҡыу, [ң] өнө менән танышыу. Эш дәфтәрҙәрендә *ң* хәрефен яҙыу, тәҡдим ителгән эштәрҙе башҡарыу.Үҙ эшеңде һәм класташтарыңдың эшен баһалау. |
| | Өйрәнелгән өн-хәрефтәрҙе ҡабатлау | Тема буйынса яңы һүҙҙәр менән танышыу. Аҙыҡ-түлек тураһында һөйләмдәр төҙөгәндә яңы һүҙҙәрҙе әүҙемләштереү. Бирелгән клише буйынса ҡыҫҡа диалог, «Нимә яратаһың?» тигән һорауҙы үҙләштереү һәм «Мин яратам...» тигән яуап төҙөү. Өйрәнелгән хәрефтәр менән һүҙҙҙәрҙе эш дәфтәрҙәренә яҙыу. Төркөмдәрҙә эш: яратҡан ризығың тураһында һораулама үткәреү. Мәктәп тормошо тураһындағы текстар тыңлау, һорауҙарға яуап биреү. Үҙ эшеңде һәм класташтарыңдың эшен |

| | | |
|---|---|---|
| | | баһалау. |
| | Телмәр үҫтереү | Дәреслектәге  сюжетлы һүрәттәр буйынса һөйләмдәр төҙөү. Өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, өндәрҙе, хәрефтәрҙе ҡабатлау. Башҡорт телендә бирелгән һөйләмдәрҙең схемаһын төҙөү. Диалогтарҙы тулыландырыу йәки дауам итеү. Уҡытыусы тәҡдим иткән анкетаны тултырыу. Үҙ эшеңде һәм класташтарыңдың эшен баһалау. |
| **Мин уйнарға яратам.**<br>**(4 сәғәт)** | [ЙО] дифтонгы | Уйынсыҡтар тураһындағы тексты тыңлап аңлау. Тема буйынса яңы һүҙҙәр менән танышыу, яңы лексиканы телмәрҙә әүҙемләштереү. Бирелгән клише буйынса ҡыҫҡа диалогтар ҡороу. [ЙО] дифтонгыһы менән өйрәнелгән һүҙҙәрҙе эш дәфтәрҙәрендә яҙыу. Дәреслектә һүҙҙәр һәм һөйләмдәр уҡыу. Үҙ эшеңде һәм класташтарыңдың эшен баһалау. |
| | [ЙӨ] дифтонгы | Уйынсыҡтар тураһында йырҙар тыңлау. Йөкмәткеһе буйынса һорауҙар һәм яуаптар биреү. Дәреслектәге текстарҙы уҡыу. [ЙӨ] дифтонгы менән эш дәфтәрҙәрендә тәҡдим ителгән эштәрҙе башҡарыу. Текстҡа төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе өҫтәү. Үҙ эшеңде һәм класташтарыңдың эшен баһалау. |
| | [ЙҮ] дифтонгы | Уйындар хаҡында диалогты тыңлап аңлау, уйнарға саҡырырға өйрәнеү. Тема буйынса яңы һүҙҙәр менән танышыу, телмәрҙә әүҙемләштереү. Диалогтарҙы тулыландырыу. Дәреслектәге тексты уҡыу. ЙҮ дифтонгы менән һүҙҙәрҙе яҙыу. Башҡорт теленән рус теленә таныш лексикалы тексты тәржемә итеү. |
| | Телмәр үҫтереү | «Хәрәкәтле уйындар» сюжетлы һүрәттәр буйынса ҡыҫҡа диалогтар төҙөү. Өйрәнелгән һүҙҙәрҙе, өндәрҙе, хәрефтәрҙе ҡабатлау. Башҡорт |

| | | |
|---|---|---|
| | | телендә һөйләмдәрҙең схемаһын төҙөү. Үтелгән темалар буйынса һөйләшеүҙә ҡатнашыу. |
| **Йәнле тәбиғәтте өйрәнәм** **(4 сәғәт)** | [ЙӘ] дифтонгы | Тәбиғәт тураһында текстар тыңлау, йөкмәткеһе буйынса һорауҙарға яуап биреү - фекер алышыу. Тема буйынса яңы һүҙҙәр менән танышыу, йыл миҙгелдәре тураһында һөйләмдәр төҙөгәндә уларҙы телмәрҙә әүҙемләштереү. Яңы һүҙҙәрҙе файҙаланып, ҡыҫҡа диалог ҡороу. Эш дәфтәрҙәренә [ЙӘ] дифтонгы менән һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. «Йәшенмәк» уйынын өйрәнеү. |
| | [ЙЫ] дифтонгы | «Минең яратҡан йәшелсәм» темаһы буйынса лексик берәмектәрҙе үҙләштереү, ятланған һүҙҙәрҙе телмәрҙә ҡулланыу. «Нимә яратаһың?» тигән һорауға яуап бирергә өйрәнеү. Һүҙҙәрҙең [ЙЫ] дифтонгыһы менән дөрөҫ яҙылышы. Парлап эшләү: яратҡан йәшелсә тураһында диалогты тулыландырыу. Дәреслек буйынса тексты һайлап уҡыу. |
| | [ЙЕ] дифтонгы | Йәшелсә һәм емештәр тураһындағы тексты тыңлап аңлау, тыңланған текст буйынса һорауҙарға яуап биреү. Лексик берәмектәрҙе өйрәнелгән темаға ярашлы үҙләштереү, ятлаған һүҙҙәрҙе телмәрҙә ҡулланыу, эш дәфтәрҙәрендә һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу. Парҙарҙа эшләү: яратҡан емеш-еләк тураһында шаблон буйынса һорау-яуап биреү. Текстарҙы уҡығанда баҫым һәм паузаларҙы иҫтә тотоу мотлаҡ.. |
| | Һөйләмдә һүҙҙәр | Яратҡан емештәр тураһындағы тексты тыңлап аңлау, текст буйынса |

| | | |
|---|---|---|
| | тәртибе | һорауҙарға яуап биреү. Тема буйынса яңы һүҙҙәр менән танышыу, тикшерелгән лексиканы файҙаланып, үҙенең дүрт аяҡлы дуҫтары тураһында һөйләмдәр төҙөү. Яңы һүҙҙәрҙе файҙаланып, ҡыҫҡа диалог ҡороу. Эш дәфтәрҙәрендә күрһәтелгән схема буйынса һөйләмдәр яҙыу. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен өйрәнеү. План буйынса дуҫ хаҡында һөйләргә өйрәнеү. «Минең яратҡан бесәйем» (эт, тутыйғош...) темаһына проект төҙөү. |
| **Белемде контролләү һәм өйрәнелгәндәрҙе ҡабатлау.**<br>**Телмәр үҫтереү. 2 сәғ.** | | Өйрәнелгән материалды ҡабатлау. Контроль эш эшләү. Хаталар өҫтөндә эш. |
| **Резерв сәғәттәр -2 сәғәт** | | |
| **2-се класс (34 сәғәт)** | | |
| **Тел бүлеге, тема** | **Программа йөкмәткеһе** | **Уҡыусыларҙың төп эшмәкәрлек төрө** |
| **Таныш булайыҡ!**<br>**(5 сәғәт)** | Үтелгәнде ҡабатлау. Алфавит. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре: [ә], [ө], [ү], | «Әйҙә, танышайыҡ! Минең исемем...» Этикет ҡағиҙәләрен үҙләштереү. Дәреслектәге текстарҙы уҡыу, һорауҙарға яуап биреү. Эш дәфтәрҙәрендә эштәрҙе башҡарыу. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен һәм алфавитын ҡабатлау. Һөйләмдәрҙе һүҙҙәргә бүлеү, һөйләмдә һүҙҙәр һанын билдәләү. Һөйләм башында һәм яңғыҙлыҡ исемдәрҙә ҙур хәрефтең яҙылыуын ҡабатлау. |

| | | |
|---|---|---|
| | [ҡ], [ғ],<br>[ç], [ҙ], [һ], [ң].<br>Һөйләмдәрҙе һүҙҙәргә бүлеү, һөйләмдәге һүҙҙәр һанын билдәләү.<br>Яңғыҙлыҡ исемдәрҙең яҙылышы. | |
| | Зат алмаштары | Танышыу тураһындағы тексты тыңлап аңлау, тыңланған текстың йөкмәткеһе буйынса һорауҙарға яуаптар. «Һин кем?» («Һеҙ кем?») һорауҙарын үҙләштереү, 2-3 репликанан торған яуаптар төҙөү. Һорау һәм раçлау һөйләмдәренең интонацияһын ҡабатлау. Дәреслектәге тексты уҡыу, эш дәфтәрендәге эштәрҙе башҡарыу. Модель буйынса яңы һүҙҙәр төҙөү: тамыр+ялғау: -сы, -се . |
| | | “Танышыу” темаһы буйынса диалогты тыңлау, тыңлаған текстың йөкмәткеһе буйынса һорауҙарға яуаптар. «Һинең исемең нисек?» тигән һорауҙы ҡабатлау («Исемең кем?»), «Һеҙҙең исемегеҙ нисек?» («Исемегеҙ кем?»), яуап ҡайтарыу һәм репликаларҙа әүҙемләштереү. Дәреслектең тексы өçтөндә эшләү, эш дәфтәрендәге эштәрҙе башҡарыу. Һөйләм башында һәм яңғыҙлыҡ исемдәрҙә баш хәрефте дөрөç яҙыу ҡағиҙәләрен ҡабатлау. Тексnúmeroа алмаштарҙы табыу. |

| | | |
|---|---|---|
| | | Танышыу тураһында тексты тыңлап аңлау. «Унын (уларҙың) исеме нисек?» һорауын үҙләштереү, яуап бирергә өйрәнеү. Өлгө буйынса үтелгән лексиканы ҡулланып ҡыҫҡа диалог төҙөү. Һиҙемләп аңлау күнекмәһен үҫтереү. Дәреслектәге текстар өҫтөндә эшләү, “Дуҫың менән таныштыр” уйынын өйрәнеү. |
| | Һорау алмаштары | Балаларҙың танышыу тураһында диалогын тыңлап ҡарау, текстың йөкмәткеһе өҫтөндә эшләү. «Һин ҡайҙа йәшәйһең?» һорауын үҙләштереү, яуап төҙөү, репликаларҙа әүҙемләштереү. Дәреслектәге тексты уҡыу, һорауҙарға яуап биреү. Уҡытыусы тәкдим иткән диалогты үҙгәртеү. Уҡытыусы менән әҙерләнгән эштәрҙе төрлө платформаларҙа башҡарыу. Эштәрҙе баһалау. |
| **Мин туғандарымды яратам**<br><br>**(5 сәғәт)** | Эйәлек алмаштары<br>«Минең, һинең, унын» | Яңы һүҙҙәр менән танышыу, телмәрҙә эйәлек алмаштарын дөрөҫ ҡулланыу, һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе, бәләкәй (2 - 3 һөйләмдән торған) текстарҙы күсереп яҙыу. Телмәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе ҡулланып, өлгө буйынса ғаилә ағзалары тураһында текст төҙөү. |
| | Эйәлек алмаштары «Беҙҙең, һеҙҙең, уларҙың» | Ғаилә тураһындағы тексты тыңлап аңлау, тыңланған текст буйынса тест тултырыу, эйәлек алмаштарын телмәрҙә ҡулланыу. Тексты алгоритм буйынса күсереп яҙыу. Туғандар тураһында ҡыҫҡа диалог ойоштороу. Йүгерек уҡыу күнекмәһен үҫтереү. |

| | | |
|---|---|---|
| | Һүҙьяһалыш моделе: төҙөү + се, бейеү + се, теген + се | Яраткан ғаилә ағзалары хаҡында диалог тыңлау, ишетелгәндең мәғәнәһе буйынса һорауҙарға яуап биреү. Дәреслектәге тексты уҡыу, текстан һуңғы эштәрҙе башҡарыу. Һүҙьяһалыш моделе буйынса һүҙҙәрҙең яһалышын ҡабатлау һәм уларҙы диалог-һорауҙа ҡулланырға өйрәтеү. Өйрәнелгән һүҙҙәр һәм һөйләмдәрҙе эш дәфтәрҙәренә яҙыу |
| | Һүҙьяһалыш моделе: балыҡ + сы, яҙыу + сы, ҡурай + сы | Туғандар тураһындағы тексты тыңлау, тыңлаған текст буйынса һорауҙарға яуап биреү. Һүҙьяһалыш моделдәрен ҡабатлау. Өйрәнелгән тема буйынса яңы лексик берәмектәрҙе үҙләштереү, телмәрҙә әүҙемләштереү. Эш дәфтәрҙәрендәге эштәрҙе башҡарыу. Дәреслектәге тексты уҡыу, һорауҙарға яуап биреү. Дәрестәге эште баһалау. |
| | Телмәр үҫтереү | Ҡыҫҡа текстарҙа, диалогтарҙа өйрәнелгән һүҙҙәрҙе ҡабатлау, схемаға ярашлы. һөйләмдәр төҙөү. Төркөмдәрҙә проект өҫтөндә эш. Уҡытыусы менән әҙерләнгән эштәрҙе төрлө платформаларҙа башҡарыу. |
| **Мәктәптәге тормошом һәм мауығыуҙары м**<br>( 6 сәғәт) | Исем. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреүе: уҡыусы + лар, китап + тар | Мәктәп тормошо тураһындағы текстарҙы тыңлау, тыңланған текстарҙың йөкмәткеһе буйынса эш. «Минең мәктәбем ниндәй?», «Ниндәй яраткан шөғөлөң бар?» һорауҙарын үҙләштереү, яуаптар төҙөү, телмәрҙе әүҙемләштереү. Тема буйынса яңы һүҙҙәр менән танышыу, бирелгән өлгө буйынса ҡыҫҡа диалог-һорауҙар төҙөү. Өйрәнелгән һүҙҙәр, һөйләмдәрҙе эш дәфтәрҙәрендә яҙыу. Исемдәрҙең күплек формаһы менән танышыу: парта лар, тәҙрәләр, дәрес тәр |
| | Исемдәрҙең күплек формаһы: ҡәләм + | Өйрәнелгән тема буйынса һорауҙарға яуаптар биреү, тәҡдим ителгән диалогты ҡыҫҡартыу. Парҙарҙа яраткан шөғөл тураһындаһөйләшеү. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреүен нығытыу. Тексты орфоэпия ҡағиҙәләрен үтәп уҡыу. |

| | | |
|---|---|---|
| | дәр, дәфтәр + ҙәр | |
| | | Мәктәп тормошо хаҡында шиғырҙарҙы тыңлау, текст буйынса һорауҙарға яуап биреү. Яңы һүҙҙәр менән танышыу, өйрәнелгән һүҙҙәрҙе һорауҙарҙа дөрөҫ ҡулланыу. Таныш лексиканы файҙаланып яуап биреү, бәләкәй текстарҙы күсереп яҙыу. Исемдәрҙе зат менән үҙгәртеү. Үҙенең класы тураһында ҡыҫҡа репликалар яҙыу. |
| | Исемдәрҙең зат менән үҙгәреүе | Башҡорт халыҡ әкиәтен тыңлап аңлау, төп геройҙарҙы хәтерҙә ҡалдырыу. Уҡытыусы тәҡдим иткән ситуацияға ярашлы һорауҙар һәм яуаптар төҙөү. Тема буйынса яңы һүҙҙәр менән танышыу. Яраткан предмет тураһында ҡыҫҡа диалог ойоштороу. Исемдәрҙе зат менән үҙгәртеү һәм һүҙбәйләнештәр төҙөү. |
| | | Мәктәптәге тәнәфес тураһындағы тексты тыңлап аңлау, тыңланған текст буйынса һорауҙар һәм яуаптар биреү. Исемдәрҙең зат менән үҙгәреүен ҡабатлау. Өлгө буйынса үҙе, мауығыуҙары тураһында бәләкәй генә текстар яҙыу. Дәреслектәге тексты уҡыу, дөрөҫ уҡыу оҫталығын үҫтереү. |
| | Белемде контролләү | Уҡытыусы тәҡдим иткән тема буйынса проект эше эшләү. Төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәт эҙләргә, анализларға, дөйөмләштерергә өйрәтеү. Проекттарҙы яҡлау, һорауҙарға яуап биреү, баһалау. |
| **Дуҫтарым менән уйнарға** | Һөйләмдең баш киҫәктәре | Дуҫтар менән уйындар тураһындағы тексты тыңлап аңлау. Өйрәнелгән темаға ярашлы лексик берәмектәрҙе үҙләштереү. Телмәрҙә ятланған һүҙҙәрҙе әүҙемләштереү. «Был нимә?», « Нимә ул?», «Был кем?», |

| | | |
|---|---|---|
| **сығам**<br>**(7 сәғәт)** | | «Бынығы кем?» һорауҙарын үҙләштереү, яуаптар төҙөү, репликаларҙа әүҙемләштереү. Эш дәфтәрҙәрендәге эштәрҙе башҡарыу. Төрлө платформаларҙа тәкдим ителгән күнегеүҙәрҙә һөйләмдәрҙең баш киҫәктәрен табыу. |
| | Һөйләмдең баш киҫәктәре | “Ҡуян һәм терпе” башҡорт әкиәтен тыңлау, әңгәмәләшеү, тыңланған тексттың йөкмәткеһе буйынса эш. Тәкдим ителгән өлгө буйынса яраткан уйындар хаҡында һөйләшеү, телмәрҙә өйрәнелгән һүҙҙәрҙе ҡулланыу. «Миңә нимә кәрәк?» һорауына яуап биреү, парҙарҙа диалог төҙөү. Кәрәкле һүҙҙәр ҡуйып, һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу. Һөйләмдең баш киҫәктәрен билдәләү. |
| | Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе | “Төлкө менән әтәс” рус халыҡ әкиәтен тыңлау,тыңланған тексттың йөкмәткеһе буйынса эш. Башҡорт телендә юҡлыҡ формалары менән танышыу, репликаларҙа әүҙемләштереү. Төркөмдәрҙә эш: деформацияланған һөйләмдәрҙе тергеҙеү, һөйләмдә һүҙҙәр тәртибен ҡабатлау. Тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү. |
| | Ҡылым тураһында төшөнсә.<br>«Нимә эшләргә?», «Нимә эшләй, «Нимә эшләйбеҙ?» | “Аҡ тирәк, күк тирәк” уйыны тураһындағы текстты тыңлау, йөкмәткеһен асыҡлау. «Нимә эшләргә?», «Нимә эшләй?», «Нимә эшләйбеҙ?», «Ни эшләйбеҙ?» һорауҙарын үҙләштереү. Бирелгән форма буйынса һөйләмдәр төҙөү. Өйрәнелгән темаға ярашлы лексик берәмектәрҙе үҙләштереү. Текстты һөйләргә өйрәнеү. Дәрестәге эшкә үҙбаһа һәм иптәштәренең эшенә баһа биреү. |

| | | |
|---|---|---|
| | һорауҙары | . |
| | Ҡылым.<br>«Ҡайҙа нимә эшләйем?», «Ҡайҙа нимә эшләйбеҙ?» һорауҙары | «Ҡайҙа нимә эшләйем?», «Ҡайҙа нимә эшләйбеҙ?» һорауҙарын үҙләштереү, үтелгән һүҙҙәрҙе файҙаланып яуап бирергә өйрәнеү. Яңы һүҙҙәр менән танышыу, бергә уйнаған уйындар тураһында ҡыҫҡа диалог ҡороу. Эш дәфтәрҙәрендә темаға ҡағылышлы һүҙҙәр, һөйләмдәр яҙыу.<br>Тексты дөрөҫ интонация менән уҡыу күнекмәһен үҫтереү. Таҡтанан күсереп яҙыу алгоритмы менән танышыу. |
| **Тирә-яҡ донъяны өйрәнәм**<br>**(7 сәғәт)** | Сифат. «Ниндәй?» һорауы | Балалар уйындары тураһында текстар тыңлау, тыңлаған текстың йөкмәткеһе буйынса һорауҙарға яуап биреү. Тәҡдим ителгән схемалар буйынса диалог алып барыу. Предмет билдәләрен аңлатҡан һүҙҙәрҙе өйрәнеү, дөрөҫ интонация менән һөйләмдәр уҡыу. Эш дәфтәрҙәрендәге эштәрҙе башҡарыу. |
| | Сифат. «Ниндәй?» һорауы | Бөжәктәр тураһындағы тексты тыңлау, тыңлаған текстың йөкмәткеһе буйынса һорауҙарға яуап биреү. Предмет билдәләрен аңлатҡан һорауҙарҙы өйрәнеү, яуаптар төҙөү. Репликаларҙа әүҙемләштереү. Парлап эшләү, диалогтар төҙөү, текстар уҡыу һәм уларға заданиелар үтәү. Предметтың тасуирламаһын өйрәнеү, предметты өлгө буйынса һүрәтләү. |
| | “Ҡайҙа? + ҡылым”, “Ҡайҙан? + | “Ҡайҙа?”, “Ҡайҙан?” һорауҙарын үҙләштереү, яуап бирергә өйрәнеү. Репликаларҙа өйрәнелгән һүҙҙәрҙе ҡуллана белеү, тәҡдим ителгән текстарҙы дөрөҫ уҡыу күнекмәһен үҫтереү. Һорауҙарға таянып, тексты |

| | | |
|---|---|---|
| | ҡылым” hүҙбәйләнештәрен өйрәнеү. | һөйләү. |
| | “Ҡайҙа? + ҡылым”, “Ҡайҙан? + ҡылым” hүҙбәйләнештәрен ҡабатлау | Ҡоштар тураһында текст тыңлау, тыңлаған текстың йөкмәткеһен күҙаллау. Ҡайҙа? Ҡайҙан? hорауҙарын ҡабатлау, өйрәнелгән лексиканы ҡулланып, яуап биреү. Өйрәнелгән материалды диалогтарҙа нығытыу Тексты дөрөҫ интонация менән уҡыу күнекмәһен үҫтереү. План ярҙамында тексты hөйләү. |
| | “Ҡайҙа? + ҡылым” hүҙбәйләнештәрен ҡабатлау | Дәрестең темаһына ярашлы текст тыңлау, йөкмәткеhе тураһында әңгәмәләшеү, яңы лексика менән танышыу, телмәрҙә әүҙемләштереү. Ҡайҙа? ҡайҙан? hорауҙарын ҡулланып, репликалар төҙөү. Деформацияланған тексты тергеҙеү, тәкдим ителгән ситуацияларға диалогтар ҡороу. |
| | “Ҡасан? + ҡылым” hүҙбәйләнештәрен өйрәнеү | Үҙгәреп тороусы парҙарҙа диалогтар ҡороу, диалогтарҙа «ҡайҙан»?, «ҡайҙа?», «ҡасан?» hорауҙарын файҙаланыу. Деформацияланған тексты тергеҙеү. Һүҙлек диктанты яҙыу, hүҙлек ярҙамында үҙ аллы тикшереү hәм баhалау. |
| | Телмәр үҫтереү | Сюжетлы hүрәттәр буйынса hөйләмдәр төҙөү, hөйләмдәрҙә үтелгән hорауҙарҙы hәм лексиканы файҙаланыу. Ҡыҫҡа репликалар менән алмашыу. |

| | | |
|---|---|---|
| | | |
| **Үтелгәнде ҡабатлау. Белемде контролләү. (2 сәғәт)** | | Үтелгән темалар һәм тәҡдим ителгән ситуациялар буйынса диалогтар һәм монологтар ҡороу. Текстарҙы тергеҙеү, һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу. Тәҡдим ителгән тема буйынса төркөмдә проект төҙөү. Проектты яҡлау, баһалау. Контроль эш эшләү, һүҙлек диктанты яҙыу. |
| **Резерв сәғәттәр -2 сәғәт** | | |
| **3 класс – 34 сәғәт.** | | |
| **Тел бүлеге, тема** | **Программа йөкмәткеһе** | **Уҡыусыларҙың төп эшмәкәрлек төрө** |
| **Танышыуға шатмын!** **(4 сәғәт)** | Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре | Танышыу тураһындағы тексты тыңлап аңлау, текстың йөкмәткеһе буйынса әңгәмәләшеү. Тема буйынса яңы һүҙҙәрҙе иҫтә ҡалдырыу, телмәрҙә әүҙемләштереү. Таныш һәм өйрәнелгән яңы һүҙҙәрҙе файҙаланып, «Танышыу» темаһына диалог ҡороу. Дәреслектәге тексты уҡыу, кәрәкле мәғлүмәт таба белеү һәләтен камиллаштырыу. Һөйләмдең баш киҫәктәре тураһында материалды ҡабатлау. |
| | Һөйләмдең | “Ҡамыр батыр” башҡорт әкиәтенең йөкмәткеһе буйынса әңгәмә (ҡыҫҡартылған вариантта), тыңланған текстың йөкмәткеһе буйынса эш. |

| | | |
|---|---|---|
| | эйәрсән киҫәктәре | «Һин ҡайҙан?» һорауы һәм уға яуап төҙөү. Парҙар араһында диалог-һорау алыу, телмәрҙә әҙер клишелар ҡулланыу. Тексты алгоритм буйынса таҡтанан күсереп яҙыу.. |
| | | Диалогты тыңлау һәм йөкмәткеһе буйынса анкета тултырыу. «Һин ҡайҙан?» һорауын биреү һәм яуап әҙерләү. Телмәрҙә әҙер өлгөләрҙе ҡулланыу һәм уларҙы яуаптар менән тулыландырыу. Парҙарҙа танышыу диалогын ҡороу һәм һөйләшеү, дөрөҫ интонация менән текстарҙы уҡыу. Дәрестәге эшмәкәрлекте баһалау. |
| | | ”Тирмәкәй” әкиәтен тыңлау, йөкмәткеһе буйынса һөйләшеү. Һөйләмдәрҙе яңы һүҙҙәр менән тулыландырыу. Диалогтарҙа ҡайҙан?, ҡайҙа?, ҡасан? һорауҙарын ҡулланыу. Деформацияланған тексты тергеҙеү, төркөмдәрҙә эшләү. Дәреслектәге тексты уҡыу, йөкмәткеһен үҙләштереү. Текстан һуң бирелгән эштәрҙе башҡарыу. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәрен өйрәнеүҙе дауам итеү. |
| **Белем алам**<br>**(4 сәғәт)** | Тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр | Мәктәп тураһындағы тексты тыңлап аңлау, тема буйынса өйрәнелгән лексиканы ҡабатлау. Яңы һүҙҙәр менән танышыу, бирелгән һүҙҙәрҙән һөйләмдәр төҙөү. Һүҙҙәрҙең тура һәм күсмә мәғәнәләрен айырыу. Дәреслектәге монологты уҡыу һәм ситуация буйынса монологты үҙгәртеү. Эш дәфтәрҙәрендә күнегеүҙәр эшләү. Уҡытыусы тәҡдим иткән һүҙлектәрҙән мәғлүмәт эҙләү. |
| | Синонимдар | Мәктәп тормошо тураһындағы тексты тыңлап аңлау, тыңланған текст буйынса тест һорауҙарына яуап биреү. Телмәрҙә «нимәһеҙ?» һорау формаһын ҡулланыу. Синонимдар менән танышыу, уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Дөрөҫ уҡыу оҫталығын үҫтереү, З.Ураҡсиндың синонимдар |

| | | |
|---|---|---|
| | | һүҙлеге менән эшләү. |
| | Антонимдар | “Урман мәктәбе” әкиәте буйынса һөйләшеү.Синонимдарҙы һәм антонимдарҙы айырыу, уларҙы телмәрҙә ҡулланыу. Тәҡдим ителгән текстарҙы орфоэпик нормаларға таянып уҡыу. Һорауҙар буйынса текст төҙөү. З.Ураҡсиндың антонимдар һүҙлегенән мәғлүмәт эҙләү. «Туған тел донъяһы» порталында интерактив уйында ҡатнашыу («Антоним һайла») |
| | Омонимдар | Мәктәп тормошонан төрлө дикторҙар башҡарыуында текстар тыңлау, төп йөкмәткене билдәләү. Диалог ҡороу. Омонимдарҙы айырыу, уларҙы текста ҡулланыу. Һөйләмдәрҙәгебуш урындарҙы тултырыу, тәҡдим ителгән текстарҙы дөрөҫ уҡыу. Һорауҙар буйынса текст төҙөү. |
| **Мине ураткан донъя**<br>**(4 сәғәт)** | Тамырҙаш һүҙҙәр | Сәскәләр тураһындағы тексты тыңлау, текст буйынса һорауҙарға яуап биреү. Тема буйынса яңы лексиканы өйрәнеү. Тамырҙаш һүҙҙәр менән танышыу. Тамыр һәм ялғауҙы айырыу, тамырҙаш һүҙҙәрҙе һайлап алыу. Деформацияланған тексты тергеҙеү. Бирелгән ситуация буйынса парҙарҙа диалог ҡороу. |
| | Тамырҙаш һүҙҙәр | «Ҡарға бутҡаһы» байрамы тураһындағы тексты тыңлап аңлау, йөкмәткеһе буйынса эш. Һүҙҙең тамырын һәм ялғауын өйрәнеү, схемала моделләштереү. Өйрәнелгән һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр төҙөү. Дәреслектәге тексты укыу, төп фекерҙе билдәләү, текстың исеме менән эшләү. Тирә-яҡ донъя тураһындағы терәк һүҙҙәр ярҙамында текст төҙөү, һығымталар яһау |
| | Исем. Исемдең килештәр менән | Ағастар тураһындағы тексты тыңлап аңлау, телмәрҙә яңы һүҙҙәр ҡулланыу, ағастар тураһында һөйләмдәр төҙөү. Тәҡдим ителгән ситуация буйынса диалог төҙөү. Кәрәкле һүҙҙәрҙе текстан яҙып алыу. |

| | | |
|---|---|---|
| | үҙгәреше | Исемдәрҙең килештәре менән танышыу, һөйләмдәр төҙөү. |
| | Исем. Исемдең килештәр менән үҙгәреше | Урмандар тураһындағы тексты тыңлау, йөкмәткеһе тураһында һөйләшеү. Тәҡдим ителгән һорауҙар һәм яуаптар менән диалог төҙөү. Исемдәрҙең эйәлек килеше менән танышыу. Дәреслектәге тексты уҡыу, текстҡа һорауҙар төҙөү. Эш дәфтәрҙәрендә күнегеүҙәр эшләү. |
| **Яраткан йыл миҙгелем**<br>**(4 сәғ)** | Исем. Исемдең килештәр менән үҙгәреше | Килеш буйынса исемдәрҙең үҙгәреүе тураһында өйрәнелгән материалды ҡабатлау. Телмәрҙә грамматик материалды әүҙемләштереү. Дөрөҫ интонация менән дәреслектәге тексты уҡыу. Һорауҙарға яуаптар, яратҡан миҙгел тураһында һөйләү. Яратҡан йыл миҙгелдәре һәм миҙгел күренештәре тураһында анкета тултырыу. |
| | Исем. Исемдең килештәр менән үҙгәреше | Йыл миҙгелдәре тураһындағы тексты тыңлап аңлау, терәк һүҙҙәр буйынса тыңланған текстың йөкмәткеһен күҙаллау. Йыл миҙгелдәре тураһында топиктар уҡыу, уҡылған текстан диалог төҙөү, миҙгел күренештәре тураһында әңгәмәләшеү. Деформацияланған тексты тергеҙеү. Йыл миҙгелдәре тураһында таблицаны тултырыу. Парҙарҙа яратҡан йыл миҙгеле хаҡында һөйләшеү. Башҡарылған эштәрҙе баһалау, интерактив таҡтала күнегеүҙәр эшләү. Йылдың төрлө осорҙары тураһында шиғырҙарҙы тасуири уҡыу. |
| | Белемде контролләү, телмәр үҫтереү | Контроль эш эшләү. Һүҙлек диктанттары яҙыу, парҙарҙа бирелгән ситуация буйынса диалогтар төҙөү, тыңлап аңлау күнекмәһен тикшереүгә йүнәлтелгән эштәр ойошторооу.. |
| **Минең гардеробым** | Сифат һүҙ төркөмө | Кейем-һалым тураһында тексты тыңлап аңлау, тыңланған текст буйынса анкета тултырыу. Предмет билдәләрен, гардероб предметтарын аңлатҡан һүҙҙәрҙе өйрәнеү. Телмәрҙә яңы һүҙҙәрҙе ҡулланыу. Рус һәм башҡорт |

| | | |
|---|---|---|
| **(7 сәғәт)** | | телдәрендә сифаттарҙың айырмаһын билдәләү. Яраткан кейем тураһында диалог ҡороу, әңгәмәсенән һорау алыу һәм уның һорауҙарына яуап биреү. Дөрөҫ интонация менән тексты уҡыу күнекмәләрен камиллаштырыу. |
| | Сифат дәрәжәләре | Сәскәләр тураһында әкиәтте тыңлау һәм төп геройҙарҙы билдәләү. Сифаттың сағыштырыу дәрәжәһе менән танышыу. Һөйләшеү ҡороу, әңгәмәсенән һорау алыу һәм уның һорауҙарына яуап биреү. Гардероб предметтарын һәм предметтарҙың төрлө билдәләрен аңлатҡан яңы һүҙҙәрҙе өйрәнеү. Текстарҙы орфоэпик уҡыу оҫталығын үҫтереү. Тәҡдим ителгән шаблон һәм терәк һүҙҙәр буйынса үҙеңдең кейемеңде һүрәтләү. |
| | Сифаттың артыҡлыҡ дәрәжәһе | Сәскәләр тураһындағы тексты тыңлап ҡарау һәм артыҡ һөйләмдәрҙе табыу. Гардероб предметтарын аңлатҡан яңы һүҙҙәр менән танышыу. Сифаттың артыҡлыҡ дәрәжәһен өйрәнеү. Кейемде һүрәтләү, монологта ятланған лексиканы ҡулланыу. Ярҙамсы һүҙҙәрҙе файҙаланып таблица тултырыу. |
| | Алмаш. Алмашты килеш менән үҙгәртеү | Гардероб предметтары тураһындағы тексты тыңлау.Текст буйынса һорауҙарға яуаптар биреү. Һорауҙарҙы дөрөҫ ҡулланыу күнекмәһен камиллаштырыу. Һорауҙарға яуап биреү, яуаптарҙың дөрөҫ формаларын һайлау. Килештәр буйынса алмаштарҙы үҙгәртеү, кейем-һалым предметтары тураһында ҡыҫҡаса текст төҙөү. «Кейем-һалым һүрәтләнеше буйынса дуҫыңды таны» уйынын өйрәнеү |
| | Алмаш. Алмашты килеш менән | Баш кейемдәре тураһындағы тексты тыңлау. Текст буйынса һорауҙарға яуап биреү. Телмәрҙә гардероб предметтарын аңлатҡан ятланған |

| | | |
|---|---|---|
| | үҙгәртеү | һүҙҙәрҙе ҡулланыу. «Сөнки» теркәүесен диалогтарҙа ҡулланыу. Һөйләмдәрҙә төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе һайлап яҙыу. Һөйләмдәрҙе башҡорт теленән рус теленә тәржемә итеү. |
| | Һан һүҙ төркөмө. Төп һандар | Тексты тыңлау, телмәрҙәге һандарҙы билдәле бер ысул менән билдәләп барыу. «Күпме?» һорауын өйрәнеү, яуаптар төҙөү. 1-ҙән алып 100-гә тиклем иҫәпте өйрәнеү. Өйрәнелгән лексиканы ҡабатлау һәм һорауҙарға яуап биреү. Магазиндан кейем-һалым һатып алыу тураһында схема ярҙамында диалог төҙөү. Яратҡан кейем тураһында ҡыҫҡа топиктар һөйләү. Дәреслектәге тексты уҡыу һәм текстан һуң бирелгән эштәрҙе башҡарыу. |
| **Мин сәйәхәтсе. (7 сәғәт)** | Ҡылым. Ҡылым замандары | Сәйәхәт тураһындағы тексты тыңлау, тыңланған текстың йөкмәткеһе буйынса эш. Тема буйынса яңы һүҙҙәр өйрәнеү, телмәрҙә яңы лексиканы әүҙемләштереү. Ҡылымдың замандары менән танышыу. Тәҡдим ителгән схема буйынса диалог алып барыу. Тексты уҡыу, һорауҙарға яуап биреү, текстан ҡылымдарҙы эҙләү. Текстың мәғәнәһе һәм ярҙамсы һүҙҙәр буйынса ҡылымдың заманын билдәләү. Интерактив таҡтала ҡылымдар бирелгән күнегеүҙе башҡарыу. |
| | Ҡылымдың хәҙерге заманы | Башҡортостан Республикаһы буйлап сәйәхәт тураһындағы тексты тыңлау, һүҙлек запасын «Сәйәхәт» темаһы буйынса яңы һүҙҙәр менән тулыландырыу. Һөйләшеүҙәрҙә яңы һүҙҙәрҙе әүҙемләштереү. Ҡылым замандары менән танышыуҙы дауам итеү. Хәҙерге заман ҡылымдарын файҙаланып, эш дәфтәрҙәрендә күнегеүҙәр башҡарыу. |
| | Ҡылымдың үткән заманы | Башҡортостан тауҙарына сәйәхәт тураһындағы тексты тыңлап аңлау, тема буйынса яңы һүҙҙәр менән танышыу, телмәрҙә төрлө һорауҙарҙы |

| | | |
|---|---|---|
| | | дөрөҫ ҡулланыу. Өйрәнелгән һүҙҙәрҙе ҡулланып яуаптар төҙөү. Үткән һәм хәҙерге замандағы ҡылымдарҙы файҙаланып, сәйәхәт тураһында ҡыҫҡа репликалар төҙөү. «ЯКласс» платформаһында тәҡдим ителгән репликаларҙан диалог ҡороу. Өйрәнелгән ҡылым формаларын нығытыуға интерактив таҡта ярҙамында эште башҡарыу. Тексты уҡыу, текстан һуң эштәрҙе башҡарыу. |
| | Ҡылымдың киләсәк заманы | Сәйәхәттәр тураһындағы тексты тыңлау һәм ҡылымдарҙың заманын билдәләү. Киләсәк заман ҡылымдары менән танышыу, текста киләсәк заман ҡылымдарын билдәләү. Һүҙбәйләнештәрҙә өйрәнелгән ҡылым замандарын файҙаланыу. Парҙарҙа, өйрәнелгән ҡылым формаларын һәм үтелгән лексиканы файҙаланып, йәйге ялға пландар тураһында диалог алып барыу. LearningApps платформаһында күнегеүҙәр эшләү. |
| | Ҡылымдың заман менән үҙгәреүе | Сәйәхәт тураһында ҡыҫҡа диалогтарҙы тыңлау, тыңланған текстың төп мәғәнәһен билдәләү. Терәк һүҙҙәр буйынса сәйәхәт тураһында диалог, топиктар төҙөү. Яттан һөйләү өсөн бер топикты һайлау. «ЯКласс» платформаһында ҡылымдың төрлө заман формаларын ҡулланып күнегеүҙәр башҡарыу |
| | Ҡылымдың заман менән үҙгәреүе | «Йомро икмәк» әкиәтен тыңлау. Парҙарҙа сәйәхәт хаҡында әңгәмә ҡороу. Карточкалар менән эшләү һәм ҡылым замандарын ҡабатлау. Тексты уҡыу, төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәтте табыу. Һығымталар яһау. «Сәйәхәт» темаһы буйынса лексиканы иң яҡшы белеүгә ярыш үткәреү. |
| | | Сюжетлы рәсемдәр буйынса һөйләмдәр төҙөү. Тәҡдим ителгән ситуацияларҙы ҡулланыу, репликалар менән алмашыу, өйрәнелгән лексиканы ҡабатлау. Тәҡдим ителгән схема буйынса төркөмдәрҙә |

| | | |
|---|---|---|
| | | өйрәнелгән текстарҙы ҡабатлау. Парҙарҙа ситуатив диалогтар алып барыу. Уҡытыусы менән әҙерләнгән эштәрҙе төрлө платформаларҙа башҡарыу |
| **Үтелгәнде ҡабатлау. Телмәр үҫтереү.**<br>**(2 сәғәт)** | Проект эше | Төркөмдәрҙә проект төҙөү. Әңгәмәсеңде тыңлай белеү, яуап төҙөү, ҡарар ҡабул итеү, проектты презентациялау, һорауҙарға яуап биреү. |
| | Белемде контролләү | Үтелгән темалар буйынса өйрәнелгән материалды ҡабатлау. Телмәр эшмәкәрлегенең дүрт төрө буйынса ла белемде тикшереү. |
| **Резерв сәғәттәр**<br>**2 сәғәт** | | |
| **4-се класс (34 сәғәт)** | | |
| **Тел бүлеге, тема** | **Программа йөкмәткеһе** | **Уҡыусыларҙың төп эшмәкәрлек төрө** |
| **Көн дә мәктәпкә барам** | Тел тураһында дөйөм мәғлүмәт | Үтелгән материалды ҡабатлау, тема буйынса репликалар менән алмашыу, һүҙлек запасын яңы һүҙҙәр менән байытыу. Әңгәмәлә ятланған клише һәм дежур фразаларҙы ҡулланыу. Башҡорт теле, уның төрки телдәр системаһында тотҡан урыны, Башҡортостан Республикаһында |

| | | |
|---|---|---|
| **(6 сәғәт.)** | | унын статусы тураһында дөйөм мәғлүмәттәрҙе ҡабатлау. |
| | Фонетика һәм графика | Мәктәп хаҡында ҡыҙ баланың хикәйәһен тыңлау, тыңланған тексттың йөкмәткеһе буйынса эш. Парлап эшләү, был тема буйынса диалогтар ҡороу. Өйрәнелгән һорауҙарҙы һәм яуаптарҙы телмәрҙә ҡулланыу. Телмәрҙә яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү һәм һүҙҙәрҙе әүҙемләштереү. Төшөп ҡалған һүҙҙәр менән һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен һәм уларҙы яҙыуҙы ҡабатлау |
| | Орфоэпия һәм лексика | Сит илдәге мәктәп тураһындағы тексты тыңлау, унын йөкмәткеһе буйынса эш. «Миңә ниндәй дәрес оҡшай?» һорауын өйрәнеү, яуабын нигеҙләү. Парлап эшләү, схема буйынса һөйләмдәр төҙөү, башҡорт шағирҙары һәм яҙыусыларының әҫәрҙәренән өҙөктәр менән танышыу. Башҡорт теленең орфоэпияһы ҡағиҙәләре менән танышыу. Башҡорт теленең лексикаһы тураһында дөйөм мәғлүмәт алыу. |
| | Исем | Л. Толстойҙың «Сауҡалыҡтағы балалар» хикәйәһе буйынса әңгәмә. «Кем? Нимә?» һорауына яуап биргән һүҙҙәрҙе ҡабатлау. «Мин нимә уҡырға яратам?» тигән һорауға яуап төҙөү. Һүҙҙәрҙең кәрәкле формаларын файҙаланып, тема буйынса монологик текст төҙөү. Терәк схемалар буйынса диалог ҡороу. |
| | Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр | Балалар дуҫлығы тураһындағы тексты тыңлап аңлау, унын йөкмәткеһе буйынса эш. Тема буйынса яңы һүҙҙәр менән танышыу. Парҙарҙа дуҫтар тураһында диалог төҙөү. Дуҫтарыңды өлгөгә таянып һүрәтләү. Телмәрҙә исемдәрҙе ҡулланыу. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙе дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен ҡабатлау. |

| | | |
|---|---|---|
| | Исемдәрҙең һан менән үҙгәреүе | Мәктәптәге дәрестәр тураһындағы тексты тыңлап аңлау, тыңланған текстың йөкмәткеһе буйынса эш. Парлап һүҙҙең өйрәнелгән формалары менән диалог ҡороу. Текстан исемдәрҙе яҙып алыу. Исемдәрҙе телмәрҙә һәм яҙыуҙа дөрөҫ ҡулланыу |
| **Ғаиләмде яратам (4 сәғәт)** | Исемдәрҙең эйәлек ялғауы | Ғаилә тураһындағы шиғырҙы тыңлау, һүҙлек запасын яңы туғанлыҡ терминдары менән байытыу. Диалог ҡороу, әңгәмәсенән уның ғаиләһе, тышҡы ҡиәфәте, характеры, ғаилә ағзаларының мауығыуҙары тураһында һорашыу. Балалар журналдарынан ғаилә тураһында мәҡәләләрҙән өҙөктәр менән танышыу. Исемдәрҙең эйәлек аффикстарын өйрәнеү, уларҙы телдән һөйләүҙә һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу. |
| | Сифат | Ғаилә ағзаларының тасуирламаһы менән тексты тыңлау, һүҙлек запасын байытыу - баланың ыңғай сифаттарын характерлаған һүҙҙәрҙе өйрәнеү. Яуаптарҙа өйрәнелгән лексиканы ҡулланыу, тәҡдим ителгән текстарҙы дөрөҫ уҡыу. Парлап эшләү. Башҡорт һәм рус шағирҙарының, яҙыусыларының әҫәрҙәренән өҙөктәр менән танышыу. «Ниндәй?» һорауын өйрәнеү, яуап төҙөү, телмәрҙе әүҙемләштереү. Башҡорт телендә сифаттар тураһында өҫтәмә мәғлүмәттәр алыу |
| | Ҡабатлау. Сифаттың сағыштырыу дәрәжәһе | Ғаиләлә балаларҙың бурыстары тураһындағы тексты тикшереү. Тыңланған текстың йөкмәткеһе өҫтөндә эш. Диалог ҡороу, һорауға яуап биреү, телмәрҙә ятланған һүҙҙәрҙе һәм һүҙ формаларын ҡулланыу. Парлап эшләү һәм өйҙәге бурыстар тураһында текст төҙөү. Сифаттарҙы сағыштырыу дәрәжәһе менән үҙгәртеүҙе ҡабатлау. Дәрес темаһы буйынса парлап һорау алыу, таҡтанан текст күсереп яҙыу. |
| **Тыуған илем** | Алмаш | Рәсәй Федерацияһы, илебеҙҙә йәшәүсе халыҡтар тураһындағы тексты |

| | | |
|---|---|---|
| **тураһында һөйләйем** **(7 сәғәт.)** | | тыңлап аңлау. Яңы лексика менән танышыу, телмәрҙә лексиканы әүҙемләштереү. Парлап эшләү, өлгө буйынса диалог төҙөү. Тыуған илебеҙ, ҡояш системаһында планетабыҙҙың урыны тураһында текстар уҡыу. Алмаштар тураһында өҫтәмә мәғлүмәт алыу. Зат алмаштарын ҡабатлау. |
| | Зат алмаштары | Башҡортостан Республикаһы тураһындағы тексты тыңлау. Ятлаған һүҙәрҙе һәм алмаштарҙы файҙаланып, үҙең йәшәгән урам, тыуған йорт тураһында текст төҙөү. Үҙеңдең эшеңде һәм кластың эшен баһалау. Зат алмаштарын килештәрҙә үҙгәртеүҙе ҡабатлау, уларҙы телмәрҙә ҡулланыу, алмаштарҙың килеш аффикстарын дөрөҫ яҙыу |
| | Эйәлек алмаштары | Башҡортостан ҡалалары тураһындағы тексты тыңлау. Темаға ҡараған яңы лексика менән танышыу. шаблонды файҙаланып, күршеләр хаҡында хикәйә, дәрес темаһы буйынса диалог-һорау төҙөү. Телмәрҙә эйәлек алмаштарын ҡулланыу. |
| | Күрһәтеү алмаштары | Мостай Кәримдең тыуған ил тураһында шиғырын тыңлау. Тыуған яҡтың яратҡан ерҙәре тураһында хикәйәләү. Телмәрҙә өйрәнелгән лексиканы, алмаштарҙы ҡулланыу, күрһәтеү алмаштарын дөрөҫ яҙыу. Лексиканы яңы һүҙәр менән байытыу. |
| | Һорау алмаштары | Ғ.Юнысованың балалар тураһында шиғырҙарын тыңлап аңлау. Үҙләштерелгән һүҙәре һәм алмаштарҙы ҡулланып, үҙҙәренең ихатаһындағы балалар тураһында яҙма текст төҙөү. Уҡытыусы тәкдим |

| | | |
|---|---|---|
| | | иткән сығанаҡтарҙан мәғлүмәт эҙләү, үҙ эшеңде һәм кластың эшен дөйөмләштереү һәм баһалау. Башҡорт һәм рус шағирҙарының, яҙыусыларының әҫәрҙәренән өҙөктәр менән танышыу. Телмәрҙә һорау алмаштарын ҡулланыу. |
| | Алмаш тураһында белемде нығытыу | Балалар фольклоры өлгөләрен тыңлау: һанашмаҡ, тиҙәйткес. Билдәләнгән тема буйынса лексиканы өйрәнеү. Шаблон ярҙамында һәм шаблонһыҙ ҡыҫҡа текстар һәм диалогтар төҙөү. Уйынды һүрәтләү, үҙ фекереңде белдереү. Башҡорт һәм рус шағирҙарының әҫәрҙәре, башҡорт фольклоры өлгөләре менән танышыу. Зат, эйәлек, күрһәтеү һәм һорау алмаштарын ҡабатлау һәм дөрөҫ яҙыу. |
| | Белемде контролләү | Үтелгән темалар, телмәр эшмәкәрлеге төрҙәре буйынса тикшереү эштәрен башҡарыу. Уҡытыусы менән әҙерләнгән эштәрҙе төрлө платформаларҙа башҡарыу |
| **Живу в деревне/городе** **(6 сәғәт)** | Һан. Ҡабатлау. | Башҡортостан райондары тураһындағы текст менән таныштырыу. Тема буйынса яңы һүҙҙәрҙе һәм һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Башҡортостан райондары һәм ауылдары (ауылдары) тураһында диалогтар һәм монологтар төҙөү. 10 - 100 иҫәпте ҡабатлау. Телмәрҙә һанды дөрөҫ ҡулланыу. Тыуған ауыл / тыуған ҡала тураһындағы бәйләнешле текст төҙөү. Уҡытыусы ҡушыуы буйынса парлап, төркөмдәрҙә эшләү. |
| | Ябай һәм ҡушма һандар | Башҡортостан Республикаһының иң ҙур ауылы - Сәйетбаба тураһындағы тексты тыңлап аңлау. Телмәрҙә һанды ҡулланыу, тыуған ауыл / тыуған ҡала тураһында бәйләнешле текст төҙөү. Алмаш парҙарҙа эшләү һәм терәк һүҙҙәр буйынса диалогтар ҡороу. Телмәрҙә ябай һәм ҡушма һандарҙы ҡулланыу, һандарҙы дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен нығытыу. |

| | | |
|---|---|---|
| | Төп һәм рәт һандары | Өфөләге Ботаника баҡсаһы тураһындағы тексты тыңлап аңлау. Баҡса үҫемлектәре тураһындағы текст төҙөү, телмәрҙә өйрәнелгән лексиканы ҡулланыу. Телмәрҙә һандарҙы ҡулланыу. Лексиканы яңы һүҙҙәр менән байытыу. Тәртип һандарының аффикстарын дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре. |
| | Йыйыу һандары | Өйрәнелгән лексиканы ҡулланып республика ҡалалары һәм ауылдары тураһында текст төҙөү. Һандарҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу. Лексиканы яңы һүҙҙәр менән байытыу. Рус һәм башҡорт телдәрендә һандарҙы сағыштырып өйрәнеү. |
| | Һан. Үтелгәнде ҡабатлау. | Асылыкүл тураһындағы текст тыңлау. Үҙең йәшәгән район һәм республиканың иҫтәлекле урындары тураһында үтелгән һүҙҙәрҙе һәм һүҙ төркөмдәрен файҙаланып текст төҙөү. Аралашып, үҙ эшеңде һәм кластың эшен баһалау. Төп, тәртип һәм йыйыу һандарын ҡабатлау. |
| | Телмәр үҫтереү | Бирелгән ситуацияларға өйрәнелгән лексиканы файҙаланып диалогтар һәм монолог ҡороу.Әҙер план буйынса текст төҙөү, сюжетлы һүрәттәргә һөйләмдәр уйлау. |
| **Һауа торошон һәм йыл миҙгелдәрен тикшерәбеҙ** | Рәүеш | Йыл миҙгелдәре тураһындағы тексты тыңлап аңлау. Һорауҙар ярҙамында йыл миҙгелдәре һәм уларҙың алмашыныуы хаҡында һөйләшеү ҡороу. Диалогтарҙа өйрәнелгән лексиканы әүҙемләштереү. Текст менән эшләү, һорауҙарға яуап биреү. Уҡытыусы менән әҙерләнгән эштәрҙе төрлө |

| | | |
|---|---|---|
| **(3 сәғәт)** | | платформаларҙа башҡарыу |
| | Рәүеш. Сифаттарҙың рәүештәрҙән айырмаһы | Һауа торошо тураһында парҙарҙа диалог төҙөү, рәүештәрҙең сифаттарҙан айырмаһы, телмәрҙә һәм яҙыуҙа уларҙы дөрөҫ ҡулланыу. Кластың эшен һәм үҙеңдең эшеңде баһалау. |
| | Башҡортостандың экологияһы. Рәүеш. Сифаттарҙың рәүештәрҙән айырмаһын ҡабатлау. | Башҡортостан тәбиғәте тураһындағы тексты тыңлау.Тыңланған текст буйынса һорауҙарға яуап биреү. Башҡортостан тәбиғәте тураһында текст төҙөү. Ҡыҙыл китапҡа индерелгән үҫемлектәр һәм хайуандар. Тәбиғәттә үҙ-үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре, тыуған төйәктең тәбиғәтен һаҡлау тураһында һөйләмдәр төҙөү. Сифаттарҙың рәүештәрҙән айырмаһын ҡабатлау |
| **Төрлө нәмәләр хаҡында һөйләшәбеҙ**<br>**(2 сәғәт)** | Ҡылым. Һөйләмдә ҡылымдарҙың урыны | Ғабдрахман Ҡадыров тураһындағы тексты тыңлап аңлау, тыңланған текст буйынса һорауҙарға яуап биреү. Билдәләнгән тема буйынса диалог алып барыу, алгоритмдар һәм һүҙлектәр ҡулланыу. Хаталарҙы табыу һәм төҙәтеү, эште баһалау. Текста ҡулланылған ҡылымдар тураһында мәғлүмәтте ҡабатлау. |
| | Ҡылымдарҙың зат менән үҙгәреше | Муса Гәрәев тураһында тексты тыңлау. Терәк схема ярҙамында үҙеңдең хыялың тураһында монолог төҙөү, яңы лексиканы үҙләштереү. Телмәрҙә өйрәнелгән лексиканы әүҙемләштереү. Ҡылымдарҙы  зат менән үҙгәртеү, ялғауҙарҙың яҙылышын ҡабатлау. |

| | | |
|---|---|---|
| | | |
| **Һатып алырға өйрәнәм**<br>**(3 сәғәт)** | Ҡылымдың юҡлыҡ формаһы | Бирелгән тема буйынса тексты тыңлау. Тыңланған текстың йөкмәткеһе буйынса эш. Дәрес темаһы буйынса диалог ҡороу, уҡытыусы тәҡдим иткән мәғлүмәт сығанаҡтарын: схемаларҙы, һүҙлектәрҙе файҙаланыу. Телмәрҙә ҡылымдың кире формаһын ҡулланыу. Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре. |
| | Ҡылымдың заман формаларын ҡабатлау | Яңы лексиканы үҙләштереү. Терәк һүҙҙәр менән диалог төҙөү.Телмәрҙә ҡылымдың заман формаларын ҡулланыу. Төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары менән эшләү, схемалар, таныш һүҙлектәр ҡулланыу, хаталарҙы төҙәтеү. Уҡытыусы әҙерләгән эштәрҙе төрлө платформаларҙа башҡарыу |
| | Телмәр үҫтереү | Үтелгән тема буйынса лексиканы әүҙемләштереү. Парҙарҙа, төркөмдәрҙә эшләү, төрлө ситуацияларға һөйләшеү ҡороу. |
| **Үтелгәнде ҡабатлау. Телмәр үҫтереү.**<br>**(2 сәғәт)** | Белемде контролләү | Үтелгән темалар буйынса өйрәнелгән материалды ҡабатлау. Телмәр эшмәкәрлегенең дүрт төрө буйынса ла белемде тикшереү. Проект төҙөү. |
| **Резерв сәғәттәр –**<br>**1 сәғәт** | | |

**Мәғлүмәт ресурстары**


1. Башҡорт телен үҙ аллы өйрәнеү өсөн «Интерактив башҡорт теле» веб-ресурсы// URL: https://bashlang.ru/ (мөрәжәғәт итеү ваҡыты 17.05.2022).
2. Балаларҙы өсөн «Балалар» интернет-порталы// URL: https://balalar.org/ (мөрәжәғәт итеү ваҡыты 17.05.2022).
3. «Башкортостан» телерадиокомпанияһының «Тамыр» балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы // URL: https://bash.news/bst (мөрәжәғәт итеү ваҡыты 18.05.2022).
4. Башкортостан Республикаһының мәғлүмәт порталы // URL: https://www.bashkortostan.ru/ (мөрәжәғәт итеү ваҡыты 18.05.2022).
5. Башкортостандың мәҙәни донъяһы // URL: http://ebook.bashnl.ru/dsweb/HomePage (мөрәжәғәт итеү ваҡыты 23.04.2022).
6. Башҡорт теленә өйрәтеүсе халыҡ-ара дистанцион система // URL: https://region.bspu.ru/ (мөрәжәғәт итеү ваҡыты 23.04.2022).
7. Русса-башҡортса онлайн һүҙлек // URL: https://huzlek.bashqort.com/ (мөрәжәғәт итеү ваҡыты 23.04.2022).
8. Башҡорт телен үҙ аллы өйрәнеү өсөн ҡулланма // URL: https://elib.bashedu.ru/dl/read/VahitovaSamouchBashkYaz.pdf/info (мөрәжәғәт итеү ваҡыты 23.04.2022).
9. ЯКласс платформаһы // URL: https://www.yaklass.ru/p/bashkirskiy_ya (мөрәжәғәт итеү ваҡыты 10.06.2022).
10. Башҡортса-русса һәм русса-башҡортса тәржемәсе : https://bashkortsoft.ru/. (мөрәжәғәт итеү ваҡыты 10.06.2022)